М. С. Дәүләтшина
Н. Н. Кинйәбаева
Г. М. Садыкова

# БАШҠОРТ ТЕЛЕ

3

БАШҠОРТ ТЕЛЕ

3

КИТАП


төлкө
ярғанат
көҙән
терпе
мышы
айыу
ҡуян
бүре
һеләүһен
ҡама


себеш
йорт ҡуяны
әтәс
тауыҡ
кәзә
ат
эт
бесәй
өйрәк
һыйыр
сусҡа

М. С. ДӘҮЛӘТШИНА, Н. Н. КИНЙӘБАЕВА,
Г. М. САДЫҠОВА

# 3 БАШҠОРТ ТЕЛЕ

**Уҡытыу рус телендә алып барылған дөйөм белем биреү ойошмаларында башҡорт телен (дәүләт теле булараҡ) өйрәнеү өсөн уҡыу ҡулланмаһы**

2-се баҫма

КИТАП
ӨФӨ • 2017

УДК 373.167.1:811.512.141
ББК 81.2 Баш-922
Д95

**Шартлы тамғалар — Условные обозначения**

А — тыңлап аңлау — аудирование

Т — төркөмдә эш — работа в группе

П — парлап эшләү — работа в паре

✻ — ҡатмарлы эш — задание повышенной трудности

! — хәтерҙә ҡалдырыу өсөн материал — материал для запоминания

1 — дәрес һаны — номер урока

— белемде киңәйтеү өсөн материал — материал для расширения кругозора

— актив һүҙлек — активная лексика

— пассив һүҙлек — пассивная лексика

**Дәүләтшина, М. С.**
Д95 Башҡорт теле : уҡытыу рус телендә алып барылған дөйөм белем биреү ойошмаларының 3-сө класы өсөн башҡорт телен (дәүләт теле буларак) өйрәнеү өсөн уҡыу ҡулланмаһы. — 2-се баҫма / М. С. Дәүләтшина, Н. Н. Кинйәбаева, Г. М. Садыҡова. — Өфө : Китап, 2017. — һүрәттәре менән 124 бит.

ISBN 978-5-295-06803-4

**УДК 373.167.1:811.512.141**
**ББК 81.2 Баш-922**

**ТП—2017**

**ISBN 978-5-295-06803-4**

© Дәүләтшина М. С., Кинйәбаева Н. Н., Садыҡова Г. М., 2015
© Васильев А. Ә., һүрәттәр, 2015
© БР-ҙың Зәйнәб Биишева ис. Башҡортостан «Китап» нәшриәте ДУП-ы, биҙәлеш, 2017

# Һаумы, мәктәп! Здравствуй, школа!

## 1 Үтелгәндәрҙе ҡабатлау
## Повторение изученного

### Алфавит

| | | |
|---|---|---|
| Аа *Аа* | Ҡҡ *Ҡҡ* | Фф *Фф* |
| Бб *Бб* | Лл *Лл* | Хх *Хх* |
| Вв *Вв* | Мм *Мм* | Һһ *Һһ* |
| Гг *Гг* | Нн *Нн* | Цц *Цц* |
| Ғғ *Ғғ* | ң *ң* | Чч *Чч* |
| Дд *Дд* | Оо *Оо* | Шш *Шш* |
| Ҙҙ *Ҙҙ* | Өө *Өө* | Щщ *Щщ* |
| Ее *Ее* | Пп *Пп* | ъ *ъ* |
| Ёё *Ёё* | Рр *Рр* | Ыы *Ыы* |
| Жж *Жж* | Сс *Сс* | ь *ь* |
| Зз *Зз* | ҫ *ҫ* | Ээ *Ээ* |
| Ии *Ии* | Тт *Тт* | Әә *Әә* |
| Йй *Йй* | Уу *Уу* | Юю *Юю* |
| Кк *Кк* | Үү *Үү* | Яя *Яя* |

**Т** **1.** Һорауҙарға яуап бирегеҙ.

Башҡорт телендә нисә хәреф бар? Башҡорт теленә генә хас өндәрҙе әйт. Ниндәй хәрефтәрҙең баш хәрефе юҡ һәм ни өсөн? Хәреф менән өн нимәһе менән айырыла?

**2.** Шиғырҙы тасуири уҡы.

Беренсе сентябрь бөгөн,
Яҡшылыҡ, Белем көнө.
Тик мәктәп һәм уҡытыусы
Йәшәү серенә өйрәтә
Ерҙәге һәр кешене.

(Тамара Ғәниева)

**3.** Мәҡәлдең мәғәнәһен аңлат.

Күп уҡыһаң, күп белерһең.

Это интересно

В мире есть 65 алфавитов. Самый большой у кхмеров — 72 буквы. У жителей Новой Гвинеи самый маленький алфавит — 11 букв. У вьетнамцев самое большое количество гласных — 55. А у абхазцев гласных звуков всего 2.

https://ru.wikipedia.org/wiki/Алфавит

**өн** — звук
**хәреф** — буква
**һуҙынҡы** — гласный
**тартынҡы** — согласный

**йәшәү сере** — секреты жизни
**ерҙәге** — на земле
**һәр** — каждый

## 2 Һин кем?
## Ты кто?



А **1.** Тексты тыңла.

Сәләм! Минең исемем Урал. Фамилиям — Кинйәбаев. Мин Өфөлә Зәки Вәлиди урамында 5-се йортта йәшәйем. Мин 21-се мәктәптә уҡыйым. Рус, инглиз телдәрен яҡшы беләм. Башҡорт телен дә өйрәнәм. Күп телдәрҙе белергә кәрәк.

п **2.** Диалогты роллəп уҡығыҙ.

— Сәләм!
— Һаумы!
— Һинең исемең нисек?
— Зифа. Ә һинең?
— Минеке Урал.
— Исемең матур икән.
— Эйе, Урал батырҙыҡы кеүек.
— Ә кем ул Урал батыр?
— Ул әкиәт батыры.

Это интересно

Башкирскому эпосу «Урал-батыр» более 4 тысяч лет. Урал-батыр на своём крылатом коне борется со злом, чтобы на земле царил мир.

https://ru.wikipedia.org/wiki/Урал-батыр

!

| Как можно здороваться? | |
|---|---|
| Һаумыһығыҙ! | Здравствуйте! |
| Хәйерле иртә! | Доброе утро! |
| Хәйерле көн! | Добрый день! |
| Хәйерле кис! | Добрый вечер! |
| Сәләм! | Привет! |
| Һаумы! | Здравствуй! |

**3.** Шиғырҙы уҡы, өндәрҙе дөрөҫ әйт.

## Хәлдәрен беләм

Күршеләремдең көн һайын
Хәлдәрен беләм.
Ихтирам менән ололап,
Сәләмдәр бирәм:
— Һаумыһығыҙ! — тип өндәшәм
Шәһит бабайға.
— Сәләм! — тип ҡулымды бирәм
Иптәш малайға.
— Хәйерле көн, Ләлә апай!
— Хәйерле көн, Әнисә!
— Һаумы, Ғәфүр, Катерина!
— Һаумы, Зилә, Нәфисә!

(«Йәншишмә» гәзетаһынан)

**4.** Уҡытыусыға, оло кешегә, дуҫтарға нисек өндәшергә ярай?

**фатир** — квартира
**йорт** — дом
**урам** — улица
**ҡала** — город

**әкиәт** — сказка

## 3 Һин ҡайҙа йәшәйһең?
## Где ты живёшь?



**А** **1.** Тексты тыңла.

Әлфиә Башҡортостанда йәшәй. Ул башҡорт ҡыҙы. Уның әсә теле — башҡорт теле.

Раян Татарстандан килгән. Ул татар. Уның әсә теле — татар теле.

Пётр Мәскәүҙән килгән. Ул рус. Уның әсә теле — рус теле.

Валя Марий Эл Республикаһынан килгән. Ул мари ҡыҙы. Уның әсә теле — мари теле.

Үҙеңде ҡунаҡтар менән таныштыр.

П **2.** Диалогтарҙы роллэп уҡығыҙ һәм хәтерегеҙҙә ҡалдырығыҙ. Оҡшаш диалогтар төҙөгөҙ.

1. — Әлфиә, таныш бул, был Настя.
— Бик шатмын. Настя, һеҙ ҡайҙан?
— Мин Шишмәнән. Ә һеҙ ҡайҙан?
— Мин Белореттан.

2. — Ғәфү ит, һин Балтастанмы?
— Юҡ, мин Сибайҙан.

3. — Айрат, таныш бул, был Олег. Ул Благоварҙан, Языковонан.
— Танышыуға шатмын.
— Мин дә.

**Это интересно**

В Республике Башкортостан мирно живут более 120 национальностей: башкиры, татары, русские, чуваши, марийцы, удмурты, поляки, немцы, азербайджанцы, армяне, казахи и т. д.

!

| **Как можно попрощаться?** | |
|---|---|
| Һау булығыҙ!<br>Осрашҡанға тиклем!<br>Хуш! Хушығыҙ!<br>Һау бул! | До свидания!<br>До встречи!<br>Пока! Прощайте!<br>Пока! До свидания! |

**таныш бул** — знакомься
**әсә теле** — родной язык
**килгән** — пришёл (-а, -о, -и), приехал (-а, -о, -и)

**шатмын** — рад
**ҡунаҡ** — гость

## 4 Һин ҡайҙан?
## Ты откуда?

А **1.** Тексты тыңла.

Минең исемем Раян. Мин Татарстанда Ҡазан ҡалаһында йәшәйем. Өфөгә ҡунаҡҡа килдем. Өфө ҡалаһында минең олатайым менән өләсәйем йәшәй. Улар хәҙер хаҡлы ялда. Иртәгә Илештән апайым да килә. Мин бик шатмын.

П **2.** Диалогты ролләп уҡығыҙ.

— Сәләм, Настя!
— Һаумы, Альбина!
— Ҡайҙан киләһең?
— Кинонан. Ә һин?
— Мәктәптән. Бөгөн бейеү түңәрәге булды.
— Бик яҡшы. Иртәгә беҙгә кил. Һау бул!
— Ярай! Хуш!

П **3.** Диалогты үҙгәртегеҙ.

**Ҡулланыу өсөн һүҙҙәр:** театрҙан, магазиндан, ҡунаҡтан, стадиондан, ... киләм.

## Это интересно

У башкир используются различные виды приветствий. Приветствия «Һаумыһығыҙ! Сәләм! Хәйерле көн! Хәйерле иртә! Хәйерле кис!», сопровождаемые рукопожатием, являются наиболее употребительными. Старинное приветствие «Әссәләмәғәләйкүм! Вәғәләйкүмәссәләм!» употребляется реже. Когда приветствия сопровождаются пожиманием руки собеседника двумя руками, это служит знаком особого расположения, радушия. Подавать только одну руку старикам, пожилым людям считается неуважением.

https://ru.wikipedia.org/wiki/Башкирский речевой этикет

!

| | | |
|---|---|---|
| Хәлдәр нисек?<br>Как дела? | яҡшы<br>һәйбәт | хорошо |
| | насар<br>шәп түгел | плохо |

**иртәгә** — завтра

**хаҡлы ял** — пенсия
**ярыш** — соревнование
**ҡунаҡҡа килеү** — прийти в гости

## 5 Һин ҡайҙан? Ты откуда?

А **1.** Айнур яҙған хатты тыңла.

Минең исемем Айнур. Фамилиям — Сәлимов. Мин Салауат ҡалаһында йәшәйем. Компьютерҙа уйнарға яратам. Шахмат уйыны ла оҡшай. Мәктәп ярышында беренсе урын алдым. Дуҫтар эҙләйем. Һеҙҙән хаттар көтәм.

П **2.** Диалогты тултырып, ролләп уҡығыҙ.

— Хәйерле көн!
— ...
— Минең исемем Алик. Ә һинең исемең нисек?
— ...
— Һин ҡайҙан килдең?
— ...
— Ғәфү ит, ишетмәнем.
— ...
— Ә-ә, рәхмәт. Әйҙә, дуҫтарым менән таныштырам.
— Киттек.

**3.** Тексты уҡы, һөйләп өйрән.

Мин Стәрлетамаҡта йәшәйем. Стәрлетамаҡ — ҙур һәм матур ҡала. Ул Стәрле йылғаһы буйында урынлашҡан. Шуға ла исемдәре оҡшаш. Беҙ Стәрлетамаҡҡа Ташкенттан күсеп ҡайттыҡ. Миңә Башҡортостан оҡшай.

**дуҫтар эҙләйем** — ищу друзей
**хаттар көтәм** — жду писем

**йылға буйында** — на берегу реки
**урынлашҡан** — расположился
**оҡшаш** — похож
**күсеп ҡайттыҡ** — переехали

## 6 Һин ҡайҙан? Ты откуда?

A **1.** Тексты тыңла.

### Башҡортостан

Башҡортостан — иркен ил. Майҙаны 143 мең 600 квадрат километр. Республиканың сиктәре Пермь, Екатеринбург, Силәбе, Ырымбур өлкәләре һәм Татарстан, Удмуртия республикалары ерҙәре менән тоташа. Башҡорттар ошо өлкәләр һәм республикаларҙа ла йәшәй. Башҡортостан үҙе 54 районға бүленә, халҡы 4 миллиондан артыҡ.

Башҡортостан Республикаһының үҙ Конституцияһы, дәүләт флагы, гербы һәм гимны бар.

Баш ҡалабыҙ менән район, ауыл һәм ҡалаларҙы тимер юл, таш юл, һыу һәм һауа юлдары бәйләй. Поездар, автобустар, кәмәләр һәм самолёттар өҙлөкһөҙ йөрөп тора.

(«Аҡбуҙат» журналынан)

Т **2.** Һорауҙарға телдән яуап бирегеҙ.

1. Башҡортостан ниндәй өлкәләр менән сиктәш?
2. Башҡортостанда нисә район бар? Һин уларҙың ҡайһыларын беләһең?
3. Башҡортостан Республикаһының дәүләт символикаһына нимәләр инә?
4. Башҡортостан ерендә ниндәй транспорт йөрөй?

Башҡортостан тураһында түбәндәге сайтта уҡый алаһығыҙ: https://ru.wikipedia.org/wiki/.

**3.** Һүрәттәрҙе ентекләп ҡара. Аҫтындағы яҙыуҙарҙы уҡы.



Башҡортостан Республикаһы флагы



Рәсәй Федерацияһы флагы




Башҡортостан Республикаһы гербы



Рәсәй Федерацияһы гербы

п **4.** Диалогты роллəп уҡығыҙ һəм əңгəмə ҡороғоҙ.

— Һаумы! Минең исемем Олег.
— Һаумы! Бик шатмын. Ə минең исемем Морат.
— Мин дə бик шат. Һин ҡайҙан?
— Мин Татарстандан.
— Шулаймы ни? Ə ҡайһы ҡаланан?
— Ҡазандан. Ə һин Өфөнəнме?
— Юҡ, мин Өфөнəн түгел, Учалынан.
— Ə-ə, ул ҡалала булғаным юҡ.
— Беҙгə ҡунаҡҡа кил. Урал йəшмəлəрен, Ирəмəлде күрерһең.

!

Башҡортостан Республикаһы Дəүлəт гербы авторы — рəссам Фазлетдин Ислахов.

Башҡортостан Республикаһы Дəүлəт гимны һүҙҙəренең авторҙары — Рауил Бикбаев, Рəшит Шəкүр.

Башҡортостан Республикаһы Дəүлəт гимны көйөнөң композиторы — Фəрит Иҙрисов.

Башҡортостан Республикаһы Дəүлəт флагы авторҙары — Урал Мəсəлимов, Ольга Асабина.

**майҙан** — площадь
**халыҡ** — народ
**дəүлəт** — государство

**сиктəре** — границы
**өлкə** — область

## 7 Һин ҡайҙан?
## Ты откуда?

А **1.** Тексты тыңла.

### Башҡортостандың байлығы

Рәсәйҙә Башҡортостан үҙенең тәбиғи байлығы менән дан тота. Башҡортостан ерендә йылғалар, күлдәр бик күп.

Башҡортостанда иң ҙур йылға — Ағиҙел. Ул Кама йылғаһына ҡоя. Ә Ағиҙелгә Ҡариҙел, Дим, Инйәр, Танып, Сәрмәсән, Эҫем, Еҙем, Нөгөш һәм башҡа йылғалар ҡушыла.

Башҡортостанда күлдәр ҙә бик күп. Уларҙың иң ҙуры — Асылыкүл. Унан ҡала Ҡандракүл, Аҡкүл, Талҡаҫ күлдәре килә. Яҡтыкүлдә, Талҡаҫта, Өргөн һәм Шәмсетдин күлдәрендә ял йорттары һәм шифаханалар эшләй. Ололар ҙа, балалар ҙа бында килеп ял итә, һаулығын нығыта.

(«Аҡбуҙат» журналынан)

Т **2.** Һорауҙарға яуап бирегеҙ.

1. Башҡортостандың ниндәй йылғаларын, күлдәрен күргәнең бар?
2. Йәй көнө ауылға барғаның бармы?
3. Был ауылда ниндәй йылғалар, күлдәр бар?

П **3.** Диалогты роллэп уҡығыҙ, үҙгәртеп төҙөгөҙ.

— Ләлә, Өфөлә булғаның бармы?

— Эйе, бар.

— Һиңә Өфө оҡшанымы?

— Әлбиттә. Бигерәк тә Салауат Юлаев һәйкәле, Башҡорт дәүләт академия драма театры, «Ләлә-Тюльпан» мәсете, Нестеров музейы.

— Тағы ҡайҙа булдың?

— Циркта һәм Ҡурсаҡ театрында.

— Якутов паркына барҙыңмы?

— Юҡ, өлгөрмәнем.

— Тағы ла Өфөлә булырға тура килһә, «Ете ҡыҙ» фонтанын да барып күр. Ул музыкаль фонтан.

!

Башҡортостандың ете мөғжизәһе

«Урал батыр» эпосы, Шүлгәнташ мәмерйәһе, башҡорт балы, Салауат Юлаев һәйкәле, ҡурай, «Янғантау» шифаханаһы, «Красноусол» шифаханаһы

**дан тота** — славится
**ял йорто** — дом отдыха
**шифахана** — санаторий

**тәбиғи байлыҡ** — природное богатство
**ҡоя** — впадает
**ҡушыла** — присоединяется
**һаулыҡ** — здоровье
**һәйкәл** — памятник

## 8 Был нимә? Бармы?
## Что это? Есть ли?

А **1.** Тексты тыңла, һорауҙарға яуап бир.

### Парта

Беләһегеҙме, партаны кем уйлап тапҡан? Инженер түгел, ә рус врачы Ф. Ф. Эрисман. Ул балаларҙың күҙ ауырыуҙарын тикшергән ғалим булған. Уларҙың һәйбәт күреүен һаҡлап ҡалырға тырышҡан. Шуға күрә парта уйлап тапҡан. Уҡыған ваҡытта китап партала ята. Күҙҙәр арымай һәм боҙолмай икән.

(«Хочу всё знать» журналынан)

Был һөйләмдәр тексҡа тура киләме?
1. Партаны уҡытыусы уйлап тапҡан.
2. Ф. Ф. Эрисман күҙ врачы булған.
3. Китап партала күҙҙән алыҫ ята, күҙ арымай.

**2.** Көләмәсте уҡы, иптәшеңә һөйләп күрһәт.

Беренсе класҡа уҡырға барған Илшат:
— Мин мәктәпкә бармайым, — ти.
— Ниңә? — тип һорай әсәһе.
— Уҡый ҙа, яҙа ла белмәйем. Һөйләшергә уҡытыусы рөхсәт итмәй, — ти Илшат.

**Т** **3.** Һүҙҙәрҙе уҡығыҙ, тәржемәһен иҫегеҙгә төшөрөгөҙ.

аҡбур, таҡта, сепрәк, уҡыусы, дәрес, тәнәфес, дәфтәр, ҡәләм, юйғыс, дәреслек, көндәлек, буяу, уҡытыусы

**П** **4.** Диалогты ролләп уҡығыҙ, һөйләп өйрәнегеҙ.

— Саша, сәләм!
— Сәләм, Ринат!
— Хәлдәр нисек? Ҡайҙан киләһең?
— Яҡшы. Гимназиянан.
— Камил кәрәк ине. Күрмәнеңме?
— Ул гимназияла ҡалды.
— Ә Лена ҡайҙа икән?
— Ул да класта ине.
— Рәхмәт! Йүгерҙем!

Это интересно

Первоначально греческое σχολή (школа) означало «досуг, свободное времяпровождение», затем стало применяться как «занятие на досуге».

В России первая школа появилась благодаря Петру I, в ней учились только мальчики 12—17 лет.

https://ru.wikipedia.org/wiki/Школа

**ғалим** — учёный
**арымай** — не устают
**боҙолмай** — не портятся

**күҙ ауырыуҙары** — глазные болезни

## 9 Был нимә? Бармы?
## Что это? Есть ли?

А **1.** Тексты тыңла, һорауҙарға яуап бир.

### «Полиглот»

Әсәһе Айнурҙы башҡорт класына уҡырға бирҙе:

— Һәр кем туған телен белергә тейеш, — тине. Айнурға бында һис кенә лә оҡшаманы. Оҡшар ине лә ул... Уҡытыусыны ла, класташтарын да аңламай ҙа ҡуя. Русса ғына һөйләшеп өйрәнгәс ни.

Аптырағас, әсәһе уны француз класына күсереп ултыртты. Беренсе дәрестә үк Айнурҙың күҙе дүрт булды. Уҡытыусы [ғ] өнөн аңлата башланы.

— Бәй, был бит башҡортса [ғ], — тип ҡысҡырып ебәрҙе Айнур. Уға французса уҡыу ҙа оҡшаманы.

Әсәһе уны инглиз класына алып барҙы. Уҡытыусы ауыҙын ғына асҡайны, Айнур аптырап ҡалды:

— Башҡортса [ç] бит был.

Башы ҡатҡан Айнур төрөк класына күсте. Тик унда ла башҡортса [һ] булып сыҡты. Малайҙар Айнурҙан «полиглот» тип көлә башланы. Шунда ғына Айнур әсәһенең һүҙҙәрен аңланы. Тырышып башҡортса өйрәнә башланы.

(Факиһа Туғыҙбаева)

Был һөйләмдәр тексҡа тура киләме?

1. Француз класында [ç] өнөн өйрәнәләр.
2. Инглиз класында [ғ] өнөн өйрәнәләр.
3. Төрөк класында [һ] өнөн өйрәнәләр.
4. Малайҙар Айнурҙан «полиглот» тип көлә башлай.
5. Айнур русса ғына һөйләшеп өйрәнгән.

п **2.** Диалогтарҙы роллəп уҡығыҙ, үҙгəртеп төҙөгөҙ.

1. — Был китап һиндə бармы?
— Юҡ.
— Ə ҡайҙа бар?
— Китапханала.

2. — Таҙа дəфтəрең бармы?
— Ниңə?
— Минең дəфтəрем тулды. Биреп тор əле.
— Мə, ал.
— Рəхмəт.

Это интересно

Первые школы у башкир появились в XVI веке и назывались мектебе и медресе. В XVIII веке появились русскоязычные школы.

https://ru.wikipedia.org/wiki/Образование в Башкортостане

!

| Как сказать нет? | |
|---|---|
| Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, юҡ.<br>Дөрөҫ түгел.<br>Хаталанаһың.<br>Улай түгел.<br>Йəл, булмай. | К сожалению, нет.<br>Неправда.<br>Ошибаешься.<br>Не так.<br>Жаль, не получится. |

**ярай** — можно, ладно, хорошо
**ярамай** — нельзя
**мөмкин** — можно

**уҡырға бирҙе** — отдала учиться
**күсте** — перешёл
**күҙе дүрт булды** (фразеол.) — очень удивился

## 10 Нимәһеҙ? Без чего?

А **1.** Тексты тыңла.

### Ялҡау Зилә

Иртән торғас, сәс тарамай,
Битен йыуымай сәй эсә.
Аҙаҡ өҫтәлен дә йыймай
Уйнарға сығып китә.

Мәктәптән ҡайтҡас, сумкаһын
Теләһә ҡайҙа ырғыта.
Берәй эш эшләргә тиһәң,
Тиҙ үк сығып һыпырта.

(«Йәншишмә» газетаһынан)

П **2.** Диалогты ролләп уҡығыҙ. Дауам итегеҙ һәм оҡшаш диалог төҙөгөҙ.

— Һаумы, Алик!
— Сәләм, Лена!
— Хәҙер ниндәй дәрес була?
— Математика дәресе.
— Ә башҡорт теле дәресе буламы?

— Була, өсөнсө дәрес.
— Һин өй эшен эшләнеңме?
— Эйе, әлбиттә.
— Бик шәп. Дәфтәреңде бир әле.
— Нимә? Бына һиңә...

**3.** Һүҙҙәрҙе иғтибар менән уҡы. Ниндәй үҙгәреш күрҙең?

| | | |
|---|---|---|
| дәфтәр | дәфтәр**һеҙ** | **без** тетради |
| ручка | ручка**һыҙ** | **без** ручки |
| ҡәләм | ҡәләм**һеҙ** | **без** карандаша |
| һүҙлек | һүҙлек**һеҙ** | **без** словаря |
| китап | китап**һыҙ** | **без** книги |
| линейка | линейка**һыҙ** | **без** линейки |

**4.** Һөйләмдәрҙе тәржемә ит.

Сижу без тетради. Пришёл без книги. Черчу без линейки. Читаю без словаря.

!

| **Как обрадоваться?** | |
|---|---|
| Бик яҡшы! | Очень хорошо! |
| Бик шәп! | Отлично! |
| Һәйбәт! Яҡшы! | Хорошо! |
| Мин бик шатмын! | Я очень рад(а)! |
| Иҫ киткес! | Прекрасно! |

**аҙаҡ** — после
**һыпырта, ҡаса** — убегает
**теләһә ҡайҙа** — куда попало
**һыҙа** — чертит

## 11 Ниməhеҙ?
## Без чего?

А **1.** Тексты тыңла.

### Өсөнсөләр

Беренсе лә түгел беҙ,
Икенсе лә түгел беҙ.
Өс йыл бергә уҡығас,
Бер ҙә булмаҫ күңелһеҙ.

Бөтәбеҙ ҙә уңғанбыҙ,
Әйтерһең, бер туғанбыҙ.
Бәләкәстәр өсөн беҙ
Ағай, апай булғанбыҙ.

(Сафуан Әлибай)

Т **2.** Уҡығыҙ һәм әңгәмә ойоштороғоҙ. Ә һеҙ ниндәй кәңәштәр өҫтәр инегеҙ?

| **Уҡыусыларға кәңәштәр:** | **Уҡытыусыларға кәңәштәр:** |
| --- | --- |
| Мәктәпкә өйгә эште эшләп килегеҙ.<br>Дәрестә телефон менән уйнамағыҙ. | Уҡыусыларға насар билдәләр ҡуймағыҙ.<br>Өйгә эште аҙыраҡ бирегеҙ. |

П **3.** Диалогтарҙы ролләп уҡығыҙ, оҡшаш диалогтар төҙөгөҙ.

1. — Гөлфиә Зөфәровна, һаумыһығыҙ!
— Һаумы, Урал!
— Ғәфү итегеҙ, мин китапһыҙ килдем.
— Нимә булды?
— Өйҙә оноттом.
— Мә, минең китапты алып тор.
— Рәхмәт.

2. — Әлфиә, башҡортса-русса һүҙлегең бармы?
— Бар.
— Биреп тор әле, мин һүҙлекһеҙ килгәнмен.
— Мә, ал. Тәнәфестә индерерһең, йәме. Миңә лә башҡорт теле дәресенә кәрәк.

!

| Как удивляться? | |
|---|---|
| Бына һиңә... | Вот тебе на... |
| Нисек улай?! | Как же так?! |
| Аптырайым! | Я удивляюсь! |
| Булмаç! | Не может быть! |

**билдә** — оценка
**кәңәш** — совет
**күңелһеҙ** — невесело

**түгел** — не
**туғанбыҙ** — родственники

## 12 Нимәһеҙ?
## Без чего?



## 13 Кем? Нимә эшләй? Кто? Что делает?

А **1.** Тексты тыңла, һорауҙарға яуап бир.

### Йәшәмеш үҫә

Ҡәнифә әбей, Йәшәмеште янына ултыртып, һораша башланы:

— Минең төргәкте ниңә алып ҡайтып бирмәнең?

— Мин... беҙ... кемгә бирергә белмәнек.

— Нисек белмәнең? «Өләсәйеңә бир», — тинем дә баһа.

— Юҡ, һин әллә ниндәй Миңкамалға тинең.

— Эй, улым, Өмөкамал тигәнмендер.

— Эйе, шулай тинең.

— Шулай булғас, ниңә бирмәнең?

— Мин ул Өмөкамалды тапманым.

— Ә өләсәйеңдең исеме нисек?

— Өләсәй.

Йәшәмештең өләсәһе йәштәре сыҡҡансы көлдө лә:

— Балам, Өмөкамал мин булам. Минең исемем Өмөкамал, — тине.

(Луиза Азамат)

1. Нисек уйлайһың, Йәшәмешкә нисә йәш икән?
2. Өләсәйеңдәрҙең исемен беләһеңме?

**Т** **2.** Ғаилә ағзаларының исемдәрен иҫегеҙгә төшөрөгөҙ.

олатай (ҡартатай), өләсәй (ҡартәсәй), атай, әсәй, апай, еҙнә, ағай, еңгә, һеңле, ҡусты, бабай, инәй, ейән, ейәнсәр

Бирелгән һүҙҙәрҙе ҡулланып, һөйләмдәр төҙөгөҙ.

**Өлгө:** Олатайымдың исеме Наил. Уға 65 йәш. Ул пенсионер.

**П** **3.** Диалогты роллəп уҡығыҙ. Үҙегеҙ ҙә оҡшатып һөйләп ҡарағыҙ.

— Айрат, һинең туғандарың бармы?
— Эйе. Апайым һәм ҡустым бар.
— Уларға нисә йәш?
— Апайыма — 13, ҡустыма 5 йәш.
— Ә исемдәре нисек?
— Урал, Әминә.
— Исемдәре матур икән.

Это интересно

**Шежере** — башкирская родословная, куда вносились имена предводителей родов по мужской линии, включались сведения об исторических событиях, важнейших фактах из жизни родов и племён. Возраст некоторых шежере составляет более тысячи лет. Знание родовых шежере считалось обязательным до 7 колена.

https://ru.wikipedia.org/wiki/Башкирское шежере

! Атай-әсәйеңә изгелек эшләһәң, оҙон ғүмерле булырһың.

**еҙнә** — муж старшей сестры
**еңгә** — жена старшего брата
**инәй** — тётя
**бабай** — дядя
**ейән** — внук
**ейәнсәр** — внучка

**төргәк** — свёрток
**йәш** — слеза
**тапманым** — не нашёл
**көлдө** — рассмеялась

## 14 Нимә эшләргә тейеш? Что должен делать?

А **1.** Тексты тыңла.

Минең исемем Шакир, фамилиям — Булатов. Миңә 9 йәш. Мин өсөнсө класта уҡыйым.

Минең атайым, әсәйем, олатайым, өләсәйем, апайым, ҡустым бар. Атайымдың исеме Ильяс. Ул врач. Әсәйемдең исеме Светлана. Ул банкта эшләй. Апайым — студент. Ул университетта уҡый. Ҡустым беренсе класта уҡый. Олатайым менән өләсәйем — пенсионерҙар. Мин уларға өйҙә ярҙам итәм. Беҙ бик татыу йәшәйбеҙ.

П **2.** Диалогты ролләп уҡығыҙ һәм дауам итегеҙ.

— Улым, мин эшкә киттем.
— Әсәй, компьютерҙа уйнайым әле?
— Юҡ, тәүҙә тәрилкәләрҙе йыу.
— Ә һуңынан компьютер яраймы?
— Юҡ. Һеңлеңдең математикаһын тикшер.
— Ә һуңынан компьютер яраймы?
— Юҡ. Дәресеңде эшлә.
— Ә һуңынан компьютер яраймы?
— ...

**3.** Тексты уҡы, һорауҙарға яуап бир.

## Әсә рәхмәте

Бөгөн Рөстәмдең әсәһе эштән һуң ҡайтты. Өйгә инде лә аптырап ҡалды:

— Улым, иҙәнде кем йыуҙы? Әллә өләсәйең килдеме?

— Юҡ, мин йыуҙым, — тине Рөстәм.

— Һин йыуҙыңмы? Һиңә кем йыуырға ҡушты?

— Бер кем дә ҡушманы. Үҙем йыуҙым. Һыу ҙа килтерҙем. Әйберҙәрҙе йыйыштырҙым.

Әсәһе улын ҡосаҡлап алды.

— Бына рәхмәт, улым! Бына рәхмәт!

Әсә лә ҡыуанды, Рөстәм дә шатланды.

(Әхтәм Ихсан)

1. Рөстәм ниндәй эштәр башҡарған?
2. Ә һин әсәйеңә ярҙам итәһеңме?
3. Ул эштәрҙе башҡарыу һиңә ауырмы, еңелме?

!

| Әлфиә | Айрат |
| --- | --- |
| Атайыма мин — ҡыҙым. | Атайыма мин — улым. |
| Әсәйемә мин — ҡыҙым. | Әсәйемә мин — улым. |
| Апайыма мин — һеңле. | Ағайыма мин — ҡусты. |
| Ҡустыма мин — апай. | Һеңлемә мин — ағай. |
| Олатайыма мин — ейәнсәр. | Олатайыма мин — ейән. |
| Өләсәйемә мин — ейәнсәр. | Өләсәйемә мин — ейән. |

**ул** — 1) сын; 2) он, она, оно
**ҡыҙ** — 1) девочка; 2) дочь

**иҙән йыуам** — мою полы
**йыйыштырам** — убираюсь
**ярҙам итәм** — помогаю
**тикшер** — проверь
**татыу йәшәйбеҙ** — дружно живём

## 15 Нимә эшләргә тейеш? Что должен делать?

А **1.** Тексты тыңла, һорауҙарға яуап бир.

### Өләсәйем

Минең өләсәйем элек заводта эшләгән. Хәҙер ул өйҙә генә тора. Өләсәйем бик уңған. Ул тәмле итеп ҡоймаҡ ҡоя, төрлө бәлештәр бешерә. Өләсәйемдең ҡулдары һис тик тормай. Ул йә йөн

иләй, йә ойоҡбаш бәйләй. Мин өләсәйемде бик яратам.

Был һөйләмдәр тексҡа тура киләме?

1. Минең өләсәйем элек фабрикала эшләгән.
2. Хәҙер ул өйҙә генә тора.
3. Әсәйем бик уңған.
4. Ул тәмле итеп ҡоймаҡ ҡоя, бәлештәр бешерә.
5. Өләсәйемдең аяҡтары һис тик тормай.
6. Мин өләсәйемде бик яратам.

**2.** Шиғырҙы тасуири уҡы.

Каникулдар етһә инде  
Өләсәйгә мин барам.  
Рәхәтләнеп ял итәмен,  
Уның янында — байрам.

(«Аҡбуҙат» журналынан)

Т **3.** Һөйләмдәр төҙөгөҙ, тәржемә итегеҙ.

**Өлгө:** Әгәр мин атай булһам, улым менән футбол уйнар инем.

| | |
|---|---|
| Әгәр мин ... булһам, | балаларым менән сәйәхәт итер инем.<br>балаларыма гел туңдырма, кәнфит алыр инем.<br>балам менән шахмат, шашка уйнар инем.<br>балам менән катокка, бассейнға, футболға, хоккейға, конкурстарға, бәшмәккә, еләккә, сит илдәргә йөрөр инем. |

П **4.** Диалогты роллəп уҡығыҙ, үҙгəртеп төҙөгөҙ.

1\. — Атай, ял көнө катокка барабыҙмы?
— Буш булһам, барырбыҙ.
— Руслан да барһын əле.
— Ярай.

2\. — Руслан, ял көнө нимə эшлəйһең?
— Белмəйем əле.
— Əйҙə, катокка барайыҡ. Атайым да бара.
— Көн йылы булһа, барырбыҙ.

**сəйəхəт** — путешествие
**бик уңған** — очень умелая

**сит илдəргə йөрөр инем** — ездил бы в другие страны
**йөн илəй** — шерсть прядёт
**ҡулдары һис тик тормай** — очень трудолюбивая

## 16 Нимə эшлəргə тейеш?
## Что должен делать?

Т **1.** Нисек уйлайһығыҙ, атай-əсəйҙəр балаларына нисек ҡарарға тейеш? Кəңəштəрҙе уҡығыҙ. Нимəлəр өҫтəр инегеҙ?

| | |
|---|---|
| Атай-əсəйҙəр балаларына күберəк ирек бирергə тейеш. | Атай-əсəйҙəр балалары менəн йышыраҡ һөйлəшергə тейеш. |
| Атай-əсəйҙəр балаларын аңлай белергə тейеш. | Атай-əсəйҙəр балаларын яратырға тейеш. |

! Атайың менән әсәйеңде тыңлаһаң, яҡшы кеше булырһың.

П **2.** Диалогтарҙы роллэп уҡығыҙ. Үҙгәртеп төҙөгөҙ, дауам итегеҙ.

1. — Тиҙҙән байрам етә.
— Ниндәй байрам?
— Әсәйҙәр байрамы.
— Ә ҡасан була?
— 30 ноябрь.
— Рәхмәт, хәҙер белдем.

2. — Андрей, һин әсәйеңә бүләк әҙерләнеңме?
— Әҙерләйем.
— Ә нимә әҙерләйһең?
— ...

**3.** Шиғырҙы тасуири уҡы, эш дәфтәренә күсереп яҙ.

## Әсәйемә



Донъялағы иң-иң матур
Кеше, әсәй, һин бит ул.
Матурлығың ай, ҡояшҡа,
Сәскәләргә тиң бит ул!

Донъялағы иң ҡәҙерле,
Иң бәхетле кеше бул.
Әсәйҙе бәхетле итеү —
Балаларҙың эше ул!

(Тәнзилә Дәүләтбирҙина)

**ай** — луна
**ҡояш** — солнце
**иң ҡәҙерле** — самый дорогой (-ая, -ое, -ие)

**ирек бирер инем** — дал бы свободу
**йышыраҡ һөйләшергә** — чаще разговаривать
**аңлай белергә** — понимать
**бәхетле итеү** — сделать счастливым

## 17 Нимә эшләргә тейеш?
## Что должен делать?

Т **1.** Балалар атай-әсәйҙәренә нисек ҡарарға тейеш? Атай-әсәйҙәр фекерен уҡығыҙ һәм үҙегеҙҙекен өҫтәгеҙ.

| | |
|---|---|
| Балалар өйгә бирелгән эштәрҙе үҙ аллы башҡарырға тейеш. | Балаларға тырышып уҡырға кәрәк. |
| Балаларға атай-әсәйҙәрен ихтирам итергә кәрәк. | Балалар атай-әсәйҙәренә ярҙам итергә тейеш. |

П **2.** Диалогты роллэп уҡығыҙ, һөйләп өйрәнегеҙ.

— Алло! Һаумыһығыҙ!
— Һаумыһығыҙ!
— Миңә Зифа апай кәрәк ине.
— Эйе, тыңлайым. Был кем?
— Зифа апай, был Айнур. Һеҙҙе әсәйҙәр байрамы менән ҡотлайым!
— Рәхмәт, Айнур! Әсәйең өйҙәме?
— Өйҙә. Ул һеҙҙе ҡунаҡҡа көтә.
— Ярай, килермен.

**3.** Байрамға ниндәй бүләк һайлар инең?







сәскә, торт, кәнфит, һүрәт, «5» билдәһе, открытка, матур шиғыр, йыр

**4.** Шиғырҙы дөрөҫ уҡы.

Әсәйеңдең рәхмәтен ал!
Юлың һәр ваҡыт уңыр.
Бәхет һине һис ташламаҫ,
Өйөңә шатлыҡ тулыр.

(Динә Талхина)

!

| | |
|---|---|
| Ғәфү итегеҙ, ...<br>Беләһегеҙме, ...<br>Әйт (әйтегеҙ) әле, зинһар, ...<br>Тыңлағыҙ әле, ...<br>Тыңла әле, ... | Извините, ...<br>Знаете, ...<br>Скажи (скажите), пожалуйста, ...<br>Послушайте, ...<br>Послушай, ... |

**ихтирам итеү** — уважать
**бәхет** — счастье
**шатлыҡ** — радость

**ташламаҫ** — не покинет
**тулыр** — наполнится
**көтә** — ждёт
**килермен** — приду

## 18 Кем ҡайҙа эшләй?
## Кто где работает?

А **1.** Тексты тыңла.

### Малайҙар

— Мин, үҫкәс, ағай булам,
Унан һуң бабай булам!
— Ә мин бабай булғас та,
Гел һәйбәт малай булам!
— Мин үҙем атай булам!
— Ә мин олатай булам!
— Үҫкәс, кем булырымды
Мин әле әйтмәй торам!
— Мин батыр һалдат булам!
— Ә мин космонавт булам!
— Ә мин Третьяк булам!
Ҡапҡала һаҡта торам.

(Роберт Миңнуллин)

**2.** Тасуири уҡы. Хыялың тураһында һөйләргә өйрән.

Мин тәржемәсе булырға хыялланам. Әле мәктәптә рус, инглиз, башҡорт телдәрен өйрәнәм. Интернетта дуҫтарым да бар. Аралашыуы бик ҡыҙыҡ. Тағы ла француз телен өйрәнергә теләйем.

**3.** Үҫкәс, һин кем булырға теләйһең? Үҙеңә һөнәр һайла.

**Өлгө:** Үҫкәс, мин банкир булам.

**Ҡулланыу өсөн һүҙҙәр:**

| | |
|---|---|
| бухгалтер | балыҡ**сы** |
| директор | тәржемә**се** |
| дизайнер | төҙөү**се** |
| риэлтор | бейеү**се** |
| программист | йыр**сы** |
| врач | һатыу**сы** |
| музыкант | китапхана**сы** |
| архитектор | тәрбиә**се** |
| журналист | умарта**сы** |
| юрист | уҡытыу**сы** |
| инженер | ҡурай**сы** |
| полицейский | баҡса**сы** |

П **4.** Диалогтарҙы ролләп уҡығыҙ, үҙгәртеп төҙөгөҙ.

1. — Мостай Кәрим кем ул, беләһеңме?
— Юҡ, белмәйем. Әйт әле!
— Ул башҡорт халыҡ шағиры.
— Ә-ә, хәҙер белдем. Рәхмәт.

2. — Әйтәйемме, үҫкәс, кем булам?
— Әйт һуң.
— Үҫкәс, мин президент булам.
— Кем-кем?
— Президент. Шуға тырышып уҡыйым.
— Бик яҡшы!

**тәржемәсе** — переводчик
**төҙөүсе** — строитель
**һатыусы** — продавец
**тәрбиәсе** — воспитатель
**йырсы** — певец
**бейеүсе** — танцор
**баҡсасы** — садовод

**булам** — буду
**үҫкәс** — когда вырасту
**хыял** — мечта
**халыҡ** — (зд.) народный

## 19 Кем ҡайҙа эшләй?
## Кто где работает?

А **1.** Тексты тыңла.

1. Мин Әлфиә. Миңә 24 йәш. Мин һатыусы. Өфөлә магазинда эшләйем. Һөнәрем үҙемә бик оҡшай.

2. Минең исемем Ринат. Фамилиям — Булатов. Мин 30 йәштә. Мәләүездә төҙөүсе булып эшләйем. Эшемде яратам.

3. Мин Гөлназ. Башҡортмон. Өфөлә йәшәйем. Ҙур фирмала тәржемәсе булып эшләйем. Инглиз телен яҡшы беләм. Аҡсамы? Кү-ү-үп!

4. Мин Резеда. Миңә 10 йәш. Мин мәктәптә уҡыйым. Үҫкәс, балалар врачы булам. Минең атайым да врач булып эшләй. Балалар уны ярата.

5. Мин Вера. Кондитер булып эшләйем. Төрлө тәмлекәстәр, торттар бешерәм. Балалар мине ярата.

П **2.** Диалогтарҙы ролләп уҡығыҙ.

1. — Марат, атайың ҡайҙа эшләй?
— Мәктәптә.
— Ул уҡытыусымы?
— Юҡ, тренер.

2. — Әлфиә, апайың ҡайҙа эшләй?
— Поликлиникала.
— Ул врачмы?
— Эйе, ул теш врачы.

3. — Юлай, ағайың уҡып бөттөмө?
— Эйе.
— Ҡайҙа эшләй?
— Бер фирмала менеджер булып эшләй.

Это интересно

Во всём мире насчитывается более 70 тысяч различных профессий. Самыми распространёнными являются профессии врачей, учителей, менеджеров, бухгалтеров, банковских работников, юристов.

Также встречаются очень редкие профессии, например, **переворачиватель пингвинов.** Пингвины не могут переворачиваться самостоятельно. По этой причине на полюсных станциях работает человек, помогающий пингвинам снова встать, когда те засматриваются на садящийся либо взлетающий самолёт.

http://timjob.ru/interesnoe/interesnye-professii.html

Т **3.** Итальян шағиры Дж. Родариҙың «Еҫе бармы һөнәрҙең?» шиғырынан өҙөк уҡығыҙ, һорауҙарға яуап бирегеҙ.

## Еҫе бармы һөнәрҙең?










Гел буяу еҫе
Малярҙан сыға.
Замазка һеңгән
Быяласыға.

Бензин һеңешкән
Шофёр ағайға.
Эшсенең ҡулы
Буялған майға.

Һатыусы бөркә
Кәнфит еҫтәре.
Дарыу аңҡыта
Доктор эштәре.

Балыҡ еҫенә
Сума балыҡсы.
Бер еҫһеҙ йәшәй
Эшһеҙ ҡалыусы.

Хушбуй һөртһә лә
Был ата ялҡау,
Ундай әҙәмгә
Эләкмәй маҡтау.

(Айһылыу Йәғәфәрова тәржемәһе)

1. Шиғырҙа ниндәй профессиялар һаналған?
2. Ни өсөн эшһеҙҙең еҫе юҡ?
3. Эшһеҙгә маҡтау эләгәме? Ни өсөн эләкмәй?

**ялҡау** — ленивый
**кеше** — человек
**еҫ** — запах
**быяласы** — стекольщик
**маҡтау** — похвала

**хушбуй** — духи
**бензин һеңешкән** — пропах бензином
**аңҡыта, бөркә** — пахнет
**эшһеҙ** — безработный

## 20 Кем ҡайҙа эшләй? Кто где работает?

А **1.** Тексты тыңла.

### Врач булам

Атайым тәржемәсе, әсәйем уҡытыусы, ағайым архитектор булып эшләй. Ә миңә, үҫкәс, кем булырға икән? Ошо һорауҙы олатайыма бирҙем. Ул 25 йыл теш врачы булып эшләне, әле пенсияла. Олатайым балалар врачы булырға кәңәш итте. Мин уның менән килештем.

(«Здоровье» журналынан)

П **2.** Диалогты роллəп уҡығыҙ, һөйләп өйрәнегеҙ.

— Роберт, сәләм! Ҡайҙан киләһең?
— Сәләм! Авиамоделист түңәрәгенән.
— Унда нимә эшләйһегеҙ?
— Беҙ унда төрлө самолёт моделдәре эшләйбеҙ.
— Ҡыҙыҡ икән.
— Эйе, үҫкәс, мин лётчик булам.
— Мин бер ҡайҙа ла йөрөмәйем. Кем булырымды белмәйем.

**Т** **3.** Һүрәттәрҙе ҡарағыҙ, һөйләмдәрҙе уҡығыҙ. Тағы ла ниндәй һөнәрҙәрҙе әйтә алаһығыҙ?

| | |
|---|---|
| — Хөрмәтле пассажирҙар! Һеҙҙе теплоходта сәйәхәткә саҡырабыҙ! |  |
| — Балалар, бал ашағыҙ. Ул бик файҙалы. |  |
| — 112 номерына шылтыраттығыҙмы? |  |

**4.** Шиғырҙы тасуири уҡы.

Бик күп апайҙар йәшәй
Беҙ йәшәгән ҙур йортта.
Улар эшләй врачтар,
Инженерҙар булып та.
Ә Таһирҙың әсәһе
Элек полковник булған.
Самолёттан ут атып,
Фашист яуҙарын ҡырған.
Минең әсәйем прораб,
Һалдыра ул ҙур йорттар,
Һалдыра халыҡ өсөн
Магазиндар, клубтар.

(Тимер Арслан)







### Это интересно

Forbes назвал 25 самых интересных профессий, которые будут востребованы через 15–20 лет. Среди них урбанист-эколог (проектирует новые экологически чистые города), менеджер космотуризма (будет разрабатывать туристические программы в околокосмическое пространство), космобиолог и космогеолог (космобиолог исследует, как ведут себя организмы в космосе, происходят ли генные изменения, и создаёт экосистемы для орбитальных станций и лунных баз; космогеолог занимается разведкой и добычей полезных ископаемых на Луне и астероидах).

http://www.univer-rating.ru

**!**

Егәрленең ҡулы ете.
Тырышлыҡ — ҙурлыҡ, ялҡаулыҡ — хурлыҡ.
Ялҡауҙың эше тарҡау.
Ҡалған эшкә ҡар яуа.

**умартасы** — пчеловод
**янғын һүндереүсе** — пожарный
**йорт, өй** — дом

**кәңәш итте** — посоветовал
**килештем** — согласился
**ҡыҙыҡ икән** — интересно
**һалдыра** — строит
**халыҡ өсөн** — для народа

## 21 Нимәләр? Нимә эшләйҙәр?
## Что? Что делают?

**1.** Яңы һүҙҙәр менән таныш.




Т **2.** Тексты уҡығыҙ, һорауҙарға яуап бирегеҙ.

Кеше — тәбиғәт балаһы. Уға һауа ла, һыу ҙа кәрәк. Кеше үҫемлек, йәнлектәрҙән башҡа йәшәй алмай. Ҡоштар, сәскәләр кешенең тормошон биҙәй. Тауҙар, урмандар, йылғалар, күлдәр булмаһа, донъя йәмһеҙ булыр ине.

Бына шуларҙың бөтәһен бергә тәбиғәт тип атайҙар.

(«Аҡбуҙат» журналынан)

1. Нимә ул тәбиғәт?
2. Кеше тәбиғәтһеҙ йәшәй аламы?
3. Һеҙҙең яҡта ниндәй йылғалар, күлдәр, тауҙар бар?

П **3.** Диалогты роллəп уҡығыҙ.

— Айрат, беләһеңме, Испанияла мамонттар төшөрөлгән мәмерйә бар икән. Кисә Интернетта уҡыным.

— Ә мин шундай мәмерйәлә булдым.

— Алдайһың!

— Ысын. Олатайымдарҙа, Бөрйән районында бар. Шүлгәнташҡа сит илдәрҙән дә кешеләр килә.

— Башҡортостанда мәмерйәләр күп инде ул.

— Мамонттар төшөрөлгән мәмерйәләр донъяла өсәү генә: береһе Францияла, икенсеһе Испанияла, өсөнсөһө беҙҙә.

### Это интересно

На территории Бурзянского района находится Капова пещера, или Шульган-Таш. Протяжённость всех ходов пещеры составляет более 2,9 км. Пещера имеет три яруса. В 1959 году зоолог А. В. Рюмин открыл в Каповой пещере (Шульган-Таш) наскальные рисунки, которые выполнены в основном охрой — природным пигментом на основе животного жира, возраст их около 18 тыс. лет, изображены мамонты, лошади и другие животные.

https://ru.wikipedia.org/wiki/Шульган-Таш(заповедник)

**тәбиғәт** — природа
**һыу** — вода
**күл** — озеро
**донъя** — мир

**тормошон биҙәй** — украшают жизнь
**йәмһеҙ** — некрасивый
**мәмерйә** — пещера
**сит ил** — заграница

## 22 Нимәләр? Нимә эшләйҙәр?
## Что? Что делают?

А **1.** Тексты тыңла.

Уралып ятҡан Уралда
Болот кеүек тауҙар бар,
Айыу, төлкө, бүреһе...
Теләгән бер януар бар.
Сөйәм тиһәң, шоңҡар бар,
Менәм тиһәң, толпар бар,
Тәрән-тәрән күле бар,
Борма-борма юлы бар.

(Ҡобайырҙан)

П **2.** Диалогты ролләп уҡығыҙ.

— Әсәй, мин мәктәптән һуң паркка барҙым.
— Унда нимә эшләнең?
— Хеҙмәт дәресенән өйгә эш бирҙеләр.
— Паркта өйгә эш эшләйҙәрме ни?
— Аппликация өсөн япраҡтар йыйҙым.
— Ниндәй япраҡтар йыйҙың?
— Имән, ҡайын, саған, миләш япраҡтарын йыйҙым. Күрһәтәйемме?
— Бик матур булған, балам.

**3.** Яңы һүҙҙәр менән таныш.

| | | |
|---|---|---|
|  имән |  саған |  ҡайын |
|  йүкә |  ҡарағай |  миләш |

### Это интересно

21 марта отмечается Всемирный день леса. В мире много разнообразных деревьев. Самыми интересными считаются: молочное дерево (содержит сок, как молоко), колбасное дерево (плоды в виде колбасок), яичное дерево (плоды похожи на куриное яйцо), шоколадное дерево — какао, хлебное дерево (плоды весом до 25 кг), кофейное дерево, железное дерево.

http://muzey-factov.ru/tag/trees

**урман** — лес
**үҫә** — растёт
**сәскә ата** — цветёт
**һарғая** — желтеет

**сәнсә** — колет
**япраҡ яра** — распускает листья

## 23 Нимәләр? Нимә эшләйҙәр?
## Что? Что делают?

А **1.** Тексты тыңла.

Башҡортостанда 20 төр ағас үҫә. Иң күп таралғандары: ҡарағай, шыршы, ҡайын, имән, саған, йүкә.

(http://www.priroda-rb.info/rastenie.html)

**2.** Яңы һүҙҙәр менән таныш.

| | | |
|---|---|---|
|  роза |  ләлә |  ҡәнәфер |
|  ынйы |  умырзая |  күгәрсен күҙе |

Т **3.** Диалогты роллəп уҡығыҙ, һорауҙарға яуап бирегеҙ.

— Уҡыусылар, бөгөн әсәйҙәр байрамы. Ниндәй сюрприздар әҙерләйһегеҙ?

Урал: — Мин роза гөлләмәһе алам.

Тимур: — Ә минең әсәйем ләлә ярата.

Радмир: — Мин торт алам. Атайым аҡса бирҙе.

Әлиә: — Минең аҡсам юҡ. Мин умырзая төшөрөп открытка яһайым.

1. Әсәйҙәр көнө ҡасан була?
2. Һинең әсәйең ниндәй сәскә ярата?
3. Әсәйҙәр байрамына һин ниндәй бүләк әҙерләйһең?

* **4.** Әкиәтте уҡы, аңларға тырыш.

## Умырзая

Йәшәгән, ти, бер бай. Байҙың улы булған. Бай малайы ярлы ҡыҙҙы яратҡан. Ҡыҙ менән егет тауға ҡасҡандар. Бай улы менән ҡыҙҙы ҡарғаған: «Улым, ҡар бул, ҡыҙ, сәскә бул», — тигән. «Сәскә менән ҡар осрашмайҙар», — тип уйлаған бай. Ә сәскә ҡар аҫтынан сыға. Уны умырзая тиҙәр. Ҡар ирегәс, умырзая үлә.

(Башҡорт халыҡ әкиәте)

### Это интересно

19 апреля отмечается День подснежника. Подснежник занесён в Красную книгу. «Умырзая» в переводе с башкирского означает «короткая жизнь» (ғүмере зая — умырзая).

**гөлләмә** — букет
**аҡса** — деньги
**бүләк** — подарок
**әҙерләйһең** — приготовишь

**осрашмайҙар** — не встречаются
**үлә** — умирает
**ҡасҡандар** — сбежали
**ҡарғаған** — проклял

## 24 Нимәләр? Нимә эшләйҙәр?
## Что? Что делают?

А **1.** Тексты тыңла, һорауҙарға яуап бир.

### Ун ике ай

Бер ҡыҙҙың үгәй әсәһе була. Ул ҡыҙҙы яратмай. Ҡыш көнө үгәй әсәй:

— Бар, миңә умырҙаяалып ҡайт, — тип уны урманға ебәрә.

Кәрзин тотоп, ҡыҙ илай-илай умырзая йыйырға китә. Урманда ун ике айҙы осрата.

Ун ике ай ҡыҙға ярҙам итәләр. Ҡыҙ бер кәрзин умырзая алып ҡайтып китә.

1. Был өҙөк ниндәй әкиәттән алынған?
2. Әкиәттең авторы кем?

**2.** Шиғырҙы тасуири уҡы.

«Ҡаҡ»ҡа ҡушһаң «ы» хәрефен,
Була ла ҡуя ҡаҡы.
Әскелтем генә ҡаҡыны
Мин яратам шул саҡлы.

(Факиһа Туғыҙбаева)

**3.** Яңы һүҙҙәр менән таныш.

| | | |
|---|---|---|
| <br>ҡаҡы — сврбига | <br>ҡымыҙлыҡ — кислица | <br>йыуа — дикий лук |
| <br>балтырған — борщевик | <br>ҡуҙғалаҡ — щавель | <br>кесерткән — крапива |

П **4.** Диалогты роллəп уҡығыҙ.

— Алло, өләсәй, һаумы! Мин май байрамдарына ауылға ҡайтам.

— Һаумы, улым! Бик яҡшы. Олатайың менән йыуа, ҡуҙғалаҡ йыйып ҡайтырһығыҙ.

— Өләсәй, ә һин ҡуҙғалаҡ бәлеше бешерәһеңме?

— Бешерәм, улым. Балтырған ашы ла бешерермен. Май айында балтырған ашын ашарға кәрәк, ул витаминдарға бай.

* **5.** Һорауға яуап бир.

Ниндәй әкиәттә ҡыҙ ағаларына кесерткәндән һайман (кольчуга) бәйләй?

Это интересно

Крапива издревле применяется для изготовления самых разных предметов нашего обихода. Из крапивного полотна на Руси и в других странах шили крепкие паруса и мешки.

В Японии крапивный жгут в сочетании с шёлком был главным материалом в изготовлении дорогих самурайских доспехов, из одеревеневших стеблей делали щиты, а из крепчайшего крапивного волокна, кручёного и натёртого воском, — тетивы для луков.

https://ru.wikipedia.org/wiki/Крапива

**ҡаҡ** — пастила
**ҡаҡы** — свербига

**әскелтем** — кисловатый

## 25 Нимәләр? Нимә эшләйҙәр?
## Что? Что делают?

A **1.** Тексты тыңла.

### Ҡуҙғалаҡ салаты

100 грамм ҡуҙғалаҡты, 4 бешкән йомортҡаны турайбыҙ. Тоҙ, борос, укроп һалабыҙ. Салатҡа шәкәр өҫтәйбеҙ. Витаминлы салат әҙер.

**2.** Яңы һүҙҙәр менән таныш.

| | | |
|---|---|---|
|  андыҙ — девясил |  мәтрүшкә — душица |  сөйәл үләне — чистотел |
|  юл япрағы — подорожник |  әрем — полынь |  аҡ сәскә — ромашка |

**3.** Шиғырҙы тасуири уҡы.

## Мәтрүшкә

Йәйҙәрен дә, ҡыштарын да
Мине ярата кеше.
Минең сәйем бик шифалы,
Тарала өйгә еҫе.

(Факиһа Туғыҙбаева)

П **4.** Диалогты роллэп уҡығыҙ.

— Әсәй, был ниндәй үлән?
— Был мәтрүшкә, балам. Ул дарыу үләне.
— Үлән дарыу буламы ул?
— Эйе, уны сәй итеп эсәләр. Һыуыҡ тейгәндә бик файҙалы.

**Т** **5.** Дарыу үләндәре тураһында проект төҙөгөҙ.

### Это интересно

Русское название «девясил» связано с тем, что в старину его употребляли «против девяти недугов».

В древности люди верили, что лежащий в прихожей девясил защитит от злых духов и лихих людей. А кусочек засахаренного девясила сделает жизнь «сладкой» и привлечёт удачу и достаток.

https://lady.mail.ru/product/devjasil/

**турайбыҙ** — нарезаем
**һалабыҙ** — кладём
**борос** — перец

## 26 Нимәләр? Нимә эшләйҙәр? Что? Что делают?

**А** **1.** Тексты тыңла.

### Әрем

Мин бар ерҙә микроб тормай,
Сихәтле була һауа.
Еҫем, һутым кешеләргә
Алыштырғыһыҙ дауа.

(Гөлфиә Юнысова)

**2.** Яңы һүҙҙәр менән таныш.

| | | |
|---|---|---|
| <br>күбәләк | <br>үрмәксе | <br>ҡырмыҫҡа |
| <br>серәкәй | <br>себен | <br>ҡамҡа |

**3.** Оҡшаған тел шымартҡысты ятла.

Күбәләктәр
Бик күмәк,
Кейгәндәр
Ебәк күлдәк.

Өләсәйҙән
Күрмәксе,
Ойоҡ бәйләй
Үрмәксе.

(«Аҡбуҙат» журналынан)

Т **4.** Рус әҙәбиәтендә бөжәктәр менән бәйле ниндәй әҫәрҙәрҙе беләһегеҙ?

**түңәрәк** — круг
**энәғараҡ** — стрекоза

**сихәтле һауа** — целебный воздух
**алыштырғыһыҙ** — незаменимый
**селтәр** — кружево

Это интересно

У муравьёв есть своё «животноводство» — они разводят тлей, которые сосут из растений сок и выделяют его избыток в виде обогащённых сахаром капелек. Тля выбрызгивает такое «молочко» прямо в рот муравья после того, как он помассирует ей брюшко усиками. Для «стада» тлей муравьи строят укрытия, которые защищают их от непогоды и нападения других насекомоядных.

Живое существо с самым большим мозгом по отношению к телу — муравей. На каждого живущего человека приходится около миллиона муравьёв.

http://muzey-factov.ru/tag/insects

## 27 Нимәләр? Нимә эшләйҙәр?
## Что? Что делают?

А **1.** Тексты тыңла.

Ҡырмыҫҡа — бик аҡыллы бөжәк. Ул йыраҡ араны еңел үтә. Аҙыҡ ташығанда 64 боролошто иҫендә ҡалдыра. Башҡа ҡырмыҫҡаларға юлды дөрөҫ итеп аңлатып бирә. Ҡырмыҫҡа иләүендә «эшселәр», «һаҡсылар», «һуғышсылар» була. Хатта разведчик ҡырмыҫҡалар ҙа бар.

(«Аҡбуҙат» журналынан)

**2.** Яңы һүҙҙәр менән таныш.

| | | |
|---|---|---|
|  |  |  |
| иңкеш | һағыҙаҡ | бал ҡорто |

**3.** Шиғырҙы ятла.

## Бал ҡорто

Сәскәнән сәскәгә ҡунып,
Бал йыя
Бал ҡорто.
Эшсән булған өсөн тулған
Бал менән
Бар йорто.

(Айһылыу Йәғәфәрова)

**П** **4.** Диалогты ролләп уҡығыҙ.

— Өләсәй, бал ҡорттарының ояһын таптым.
— Ҡайҙа?
— Өй башында.
— Улым, бал ҡорттары умартала йәшәй. Был һағыҙаҡ ояһылыр.
— Ә һағыҙаҡ бал йыямы?
— Юҡ, йыймай, ә ашарға ярата.

! Бал ҡорто һиңә осоп килһә, тыныс ҡына тор. Бал ҡорто саҡһа, уның ҡаяуын алып ташла. Ҡорт саҡҡан урынға йод һөрт.

Это интересно

Пчела старше человека на 55–60 млн лет. Уже первобытный человек был знаком с мёдом и любил его.

Для получения одного килограмма мёда пчёлы должны сделать до 4500 вылетов и взять нектар с 6–10 млн цветков. Сильная семья может собрать в день 5–10 кг мёда (10–20 кг нектара). По шероховатой поверхности пчела способна тащить груз, превышающий в 320 раз вес её тела (лошадь везёт груз, равный весу её собственного тела).

http://pchelovod.narod.ru/polezno.htm

**болон** — луг
**кәрәҙ** — соты
**умарта** — улей
**бал йыя** — собирает мёд
**оса** — летает
**саға** — жалит
**уҫал** — злой (-ая, -ое, -ые)

**боролош** — поворот
**һаҡсы** — сторож
**солоҡ** — борть
**һуғышсы** — воин
**ҡырмыҫҡа иләүе** — муравейник
**саҡмай** — не жалит
**егәрле** — трудолюбивый

# 28 Нимәләр? Нимә эшләйҙәр?
## Что? Что делают?

А **1.** Тексты тыңла.

Бал ҡорто 100 грамм бал йыйыр өсөн 46 мең километр юл үтә, был экватор буйлап осоп сыҡҡанға тиң. Бал ҡорто бер көндә 7 мең сәскәнән һут йыя, бер осоуҙа 40–50 мг һут килтерә. Ул еҫ һиҙеү буйынса чемпион, сәскә еҫен 1 километрҙан тоя.

(«Ғаилә календары»нан)

**2.** Яңы һүҙҙәр менән таныш.

| | | |
|---|---|---|
|  |  |  |
| өкө | ҡауҙы | ҡыҙылтүш |
|  |  |  |
| һуйыр | сәүкә | ҡор |

п **3.** Диалогты ролләп уҡығыҙ.

— Атай, ҡоштар ҡыш көнө нимә ашай?

— Төрлө ағас емештәре, орлоҡтар.

— Ҡалала ағастар аҙ бит, атай.

— Уларға кешеләр ярҙам итә.

— Нисек итеп?

— Тағараҡтар эшләйҙәр, ем бирәләр.

— Һин тағараҡ эшләй беләһеңме, атай?

— Эйе, улым.

— Әйҙә, беҙ ҙә тағараҡ эшләйек.



т *

**4.** Мәҡәлде уҡығыҙ, әңгәмә ҡороғоҙ.

Ҡоштоң ҡошо балаһы өсөн ҡапҡанға эләгә.

**5.** Шиғырҙы тасуири уҡы.

## Өкө

«Ух-ухх, ух-ухх», — тимәнем,
Көндөҙ һеҙҙе күрмәнем.
Төндә күрһәм дә, килмәнем,
Ҡуян, сысҡан эҙләнем.

(«Аҡбуҙат» журналынан)

### Это интересно

Аисты во время перелётов могут периодически засыпать, не опускаясь на землю, на время до десяти минут. Уставший аист перемещается в центр косяка, закрывает глаза и дремлет, а сохранять направление и высоту полёта в это время ему помогает обострившийся слух.

http://muzey-factov.ru/tag/birds

**ҡауҙы** — аист

**еҫ һиҙеү** — обоняние

## 29 Нимәләр? Нимә эшләйҙәр?
## Что? Что делают?

А **1.** Тексты тыңла.

### Беҙҙә ҡышлаусы ҡоштар

Ҡыш беҙҙең яҡта бик ҡаты була. Ыжғыр бурандар ҡотора, ел олой. Был ваҡытта сыйырсыҡ, ҡарлуғас, һандуғастар күптән йылы яҡҡа киткән була. Беҙҙә ҡыштарға сәүкә, һайыҫҡан, турғай, күгәрсен, һуйыр, ҡорҙар ғына ҡала. Улар ҡышты төрлөсә үткәрә.

(«Йәш натуралист» журналынан)

**2.** Яңы һүҙҙәр менән таныш.

| | | |
|---|---|---|
|  һабан турғайы — жаворонок |  шыршы турғайы — клёст |  ҡарабаш турғай — синица |
|  балыҡсы турғай — зимородок |  үрмәлсек турғай — поползень |  һыу турғайы — оляпка |
|  кесерткән турғайы — крапивник |  өй турғайы — канарейка |  таң турғайы — зарянка |

**Т** **3.** Тексты уҡығыҙ, тәржемә итегеҙ.

Ҡыш көнө беҙ шыршыла ҡош ояһы таптыҡ. Бер нисә көндән был ояны ҡарарға тағы килдек. Ҡарайбыҙ — оя эсендә яңы ғына сыҡҡан ҡош балалары ята. Үҙҙәре яланғастар, һуҡырҙар. Был ниндәй мөғжизә? Ләкин бында бер ниндәй ҙә мөғжизә юҡ: бер пар шыршы турғайы оя ҡорған һәм бала сығарған икән. Шыршы турғайы — ҡыш-тарын һалҡындан да, аслыҡтан да ҡурҡмай торған ҡош ул.

(Виталий Бианкиҙан)

✻ **4.** Дәрестә үтелгән ҡоштар тураһында Интернеттан мәғлүмәт тап, иптәштәреңә һөйлә.

Это интересно

Оляпка прекрасно приспособлена для охоты под водой. Она хорошо плавает, ныряет и передвигается по дну водного потока. Для проталкивания себя в толще воды использует крылья и лапы, балансируя при этом хвостом.

http://www.ebirds.ru/bird/190.htm

**ҡош ояһы** — гнездо птицы
**мөғжизә** — чудо

**яланғас** — голый

## 30 Нимәләр? Нимә эшләйҙәр?
## Что? Что делают?



## 31 Нимә? Нимә эшләй?
## Что? Что делает?

**1.** Яңы һүҙҙәр менән таныш.






ҡыш яҙ йәй көҙ

Т **2.** Тексты уҡығыҙ һәм тәржемә итегеҙ.

Йыл мизгелдәргә һәм айҙарға бүленә. Бер йылда 4 мизгел, 12 ай. Йыл мизгелдәре: көҙ, ҡыш, яҙ, йәй.

Көҙ айҙары: сентябрь, октябрь, ноябрь.
Ҡыш айҙары: декабрь, ғинуар, февраль.
Яҙ айҙары: март, апрель, май.
Йәй айҙары: июнь, июль, август.

П **3.** Диалогты роллэп уҡығыҙ.

— Илдар, һин көҙҙө яратаһыңмы?
— Юҡ, яратмайым. Көҙ көнө күңелһеҙ. Ағастар һарғая, ямғыр яуа, бысраҡ була. Мин ҡыш менән йәйҙе яратам.
— Ни өсөн?

— Йәйен каникулдар башлана. Йәй көнө рәхәтләнеп һыу инәм, ҡояшта ҡыҙынам, уйнайым.

— Ә ҡышты ни өсөн яратаһың?

— Ҡыш көнө лә рәхәт. Саңғыла йөрөйөм, сана шыуам, хоккей уйнайым.

— Ә мин көҙҙө яратам. Ағас япраҡтары төрлө: ҡыҙыл, һары, көрән, йәшел. Шундай матур!

— Ә яҙҙы яратаһыңмы?

— Эйе. Яҙ көнө ҡоштар ҡайта. Көндәр йылына. Ағастарҙа йәшел япраҡтар күренә башлай.

Һиңә ниндәй миҙгел оҡшай һәм ни өсөн?

!

**Ҡасан?**

йәйен (йәй көнө)
көҙөн (көҙ көнө)
ҡышын (ҡыш көнө)
яҙын (яҙ көнө)

Это интересно

Все месяцы на башкирском языке имеют русские названия, кроме января — ғинуар. В документах, в школе и т. п. названия месяцев пишутся на русском. В литературе либо в деревнях можно услышать и необычные названия: январь — һыуығай, февраль — шаҡай, март — буранай, апрель — алағарай, май — һабанай, июнь — һөтай, июль — майай, август — урағай, сентябрь — һарысай, октябрь — ҡарасай, ноябрь — ҡырпағай, декабрь — аҡъюлай.

http://f13.ucoz.net/news/2013-01-15-39

**йыл** — год
**ай** — месяц
**аҙна** — неделя
**миҙгел** — время года

## 32 Нимә? Нимә эшләй?
## Что? Что делает?

A **1.** Әкиәтте тыңла, һорауҙарға яуап бир.

Борон-борон заманда, Ҡыш — малай, ә Яҙһылыу, Йәйһылыу, Көҙһылыу бәләкәй ҡыҙҙар булған саҡта, йәшәгән, ти, бер буяусы. Уның тылсымлы буяуҙары булған.

Бер көндө буяусы, дуҫтарын саҡырып, бөтә буяуҙарын өҫтәлгә һалған. Кемгә ниндәй төҫ оҡшай, шуны алырға ҡушҡан. Яҙһылыу асыҡ йәшел төҫтәге буяуға үрелгән. Йәйһылыу ҡуйы йәшел, ҡыҙыл, күк, зәңгәр, ҡара төҫтәрҙе һайлаған. Көҙһылыу һары буяуҙы алған. Ҡышҡа аҡ буяу тороп ҡалған. Буяусы Ҡышты ла шатландырған. Аҡ буяу, уның ҡулдары ҡағылыу менән, ялтырап киткән. Ошо ваҡыттан һуң Ҡыш һәр ваҡыт аҡ, матур, әммә үҫал булып ҡалған.

(Гөлсирә Батталованан)

1. Ҡыҙҙарҙың исемдәре нисек?
2. Йәйһылыу ниндәй төҫтәр һайлаған?
3. Яҙһылыу ниндәй төҫкә үрелгән?
4. Көҙһылыу ниндәй төҫтө алған?
5. Ни өсөн Ҡыш үҫал?

П **2.** Диалогты ролләп уҡығыҙ, һорауҙарға яуап бирегеҙ.

— Ағай, мин Ҡыш бабайға хат яҙҙым.
— Ә ҡайҙа ебәрәһең?
— Антарктидаға.
— Ҡыш бабай бит унда йәшәмәй.
— Ә ҡайҙа йәшәй?
— Великий Устюгта уның резиденцияһы бар. Интернеттан адресын ҡарайыҡмы?
— Ысынмы? Әйҙә!

1. Ҡыш бабайҙың өйө ҡайҙа?
2. Ҡыш бабайға хат яҙғаның бармы?

**3.** Шиғырҙы тасуири уҡы, ятлап ал.

## Шыршы

Йәшел шыршы матурлана
Уйынсыҡтар тағылһа,
Алтын, көмөштәй нурлана
Киске уттар ҡабынһа.

Тирәһендә әйләнәбеҙ,
Күмәкләшеп йырлайбыҙ.
Ҡыш бабай ҙа йырлай бергә,
Бергәләшеп уйнайбыҙ.



(Ҡадир Даян)

**4.** Һәр илдең үҙ Ҡыш бабайы бар. Мәҫәлән, Санта-Клаус, Пэр-Ноэль, Бефана әбей һ. б. Үзбәкстандағы Яңы йыл бабайы **Ҡор бобо** исемле, ҡаҙаҡтарҙыҡы — **Аяз ата**, ҡалмыҡтарҙыҡы — **Зул.** Удмурттарға Яңы йылда **Тол бабай,** яҡуттарға **Чысхаан,** сыуаштарға **Хёл Муччи** килә.

Ә һин ниндәй Ҡыш бабайҙарҙы беләһең?

Т ✻ **5.** Ҡыш тураһында ниндәй әкиәттәр беләһегеҙ? Һөйләшеп алығыҙ.

Это интересно

Всего в 13 километрах от Великого Устюга находится **волшебная вотчина Деда Мороза.**



Написать письмо Деду Морозу можно по адресу: **162390, Россия, Вологодская обл., г. Великий Устюг, Почта Деда Мороза** или на сайте: **pochta-dm.ru/letter.**

http://velikiy-ustyug-v-gosti-k-dedu-morozu.html

**алған** — взял (-а, -и)

**үрелгән** — потянулась
**ҡулдары ҡағылыу менән** — как только дотронулся руками
**тороп ҡалған** — остался
**ҡушҡан** — велел

## 33 Нимә? Нимә эшләй?
## Что? Что делает?

**1.** Яңы һүҙҙәр менән таныш.

   

| | | | |
|---|---|---|---|
| ҡар | тамсы | ҡоштар | гөрләүектәр |
| ирей | тама | ҡайта | аға |

П **2.** Диалогты ролләп уҡығыҙ, һорауҙарға яуап бирегеҙ.

— Атай, беҙҙең мәктәптә конкурс була.
— Ниндәй конкурс, улым?
— Иң яҡшы сыйырсыҡ ояһына. Атай, бөгөн эшләйбеҙме?
— Улым, материал алырға кәрәк, эшләрбеҙ.
— Атай, фанера менән буяу алма.
— Беләм-беләм, улым.

1. Сыйырсыҡ ояһын нисек эшләйҙәр?
2. Ни өсөн фанера һәм буяу кәрәкмәй?

**3.** Шиғырҙы тасуири уҡы.

### Караптар ағыҙабыҙ

Яҙ килә, тип сылтырлайҙар
Беренсе гөрләүектәр.
Күҙебеҙҙе сағылдыра
Урамда күләүектәр.

Ә беҙ инде бик күптән
Йәй көнөн һағынабыҙ.
...Ҡыш ултырып китһен, тип беҙ
Караптар ағыҙабыҙ.

(Ринат Хәйри)

✻ **4.** Яҙ менән бәйле һынамыштар тап.

Это интересно

Науруз (Навруз) — праздник Нового года у башкир и у ряда народов Евразии. Он знаменует первый день весны и обновление природы. По древнему обычаю, накануне Науруза люди должны прибраться в своих домах, навести порядок во дворах и огородах, рассчитаться с долгами. В Науруз принято готовить кушанья из семи продуктов.

http://www.tatar-inform.ru/news/2015/03/21/446766/

**гөрләүек** — ручей
**күләүек** — лужа
**ирей** — тает
**тамсы тама** — капает капель

**ҡайта** — возвращается
**аға** — течёт

# 34 Нимә? Нимә эшләй?
## Что? Что делает?

А **1.** Тексты тыңла.

### Яҙ килә

Ҡарҙар ирей, тамсы тама,
Яҙ килә, яҙ, ашығып.
Сыйырсыҡтар ҙа ҡайталар
Ояларын һағынып.

(«Аҡбуҙат» журналынан)

**2.** Яңы һүҙҙәр менән таныш.

| | | | |
|---|---|---|---|
|  |  |  |  |
| боҙ китә | һыу таша | ағастар бөрөләнә | йәнлектәр уяна |

* **3.** Һынамыштарҙы уҡы. Тағы ниндәй һынамыштар беләһең?

Март башында турғай эсерлек һыу булһа, йыл яҡшы була.

Ҡуҙғалаҡ күп булһа, ҡыш йылы булыр.

**4.** Һүрәттәрҙе һүҙҙәр менән алмаштырып, тексты уҡы.

## Боҙбармаҡтар ниңә илай?

Бөгөн  иртә уянды. Нурҙары күп, йылы.  йылмайышты. Ҡыйыҡтарҙан  тамды. «Яҙ етте!» — тип шатланды  .

Йылғаларҙа  .  гөрләште,  сырылдашты: «Рәхмәт,  ! Рәхмәт,  !»  ҙа ҡыуандылар: «Рәхмәт,  , рәхмәт,  !»  шатланды: «Беҙ  еңдек!»

 та шатлығынан нығыраҡ ҡыҙҙыра башланы.  тамды.  һайранылар, ләкин  илай ине. Боҙбармаҡтар ниңә илаған?

(Сафуан Әлибай)

**ояларын һағынып** — соскучившись по своим гнёздам
**һайранылар** — пели
**ҡыуандылар** — обрадовались
**илай** — плачет

## 35 Нимә? Нимә эшләй?
## Что? Что делает?

А **1.** Тексты тыңла.

Яҙ етеү менән коштар ҡайта. Ҡарғалар һәм сыйырсыҡтар беренсе булып киләләр. Оҙаҡламай һабан турғайы ҡайтыр. Ҡар аҫтынан умырзаялар күренә. Йылғаларҙа боҙ китә, һыу таша. Күп йәнлектәр йоҡонан уяна.

(«Аҡбуҙат» журналынан)

**2.** Яңы һүҙҙәр менән таныш.


ҡояшлы көн


болотло көн


ямғырлы көн

П **3.** Диалогты роллэп уҡығыҙ, үҙгәртеп төҙөгөҙ.

— Әсәй, бөгөн көн ниндәй?
— Бөгөн көн болотло, һыуыҡ, балам.
— Тышта нисә градус?
— 5 градус йылы.
— Иртәгә көн нисек була?
— Иртәгә ямғырлы була.

**4.** Шиғырҙы тасуири уҡы.

## Шундай йәмле йәй



Йәм-йәшел донъя,
Аяҙ зәңгәр күк,
Бейектән ҡояш
Тора гел көләп.
Йә ямғыр яуа,
Йәйғоро ҡалҡа,
Гөрләүек аға
Ана шул саҡта.
Беҙ һыу инәбеҙ
Йылы күлдәрҙә,
Ҡомда ҡыҙынып
Эҫе көндәрҙә.

(Факиһа Туғыҙбаева)

**йәйғор** — радуга
**ямғырлы** — дождливый (-ая, -ое, -ые)

**донъя** — мир
**аяҙ күк** — ясное небо

### Это интересно

Знаете, что радуга — не дуга, а круг! На небе мы видим только половину этого круга — дугу, а увидеть радугу целиком мешает горизонт. У разных народов разное количество цветов в радуге. У нас принято считать, что в радуге 7 цветов. В Великобритании их насчитывают 6, в Китае — 5, а в арабских странах — всего 4.

http://lubopitnie.ru/raduga

## 36 Нимә? Нимә эшләй?
## Что? Что делает?

А **1.** Тексты тыңла.

### Яҙ етте

Яҙ етте, яҙ етте,
Яратҡан миҙгел етте.
Яҙ еткәс, ҡоштар ҡайта,
Яҙҙы һәр кем ярата.
Малайҙар гел күләүектә
Кәмә эшләп йөҙҙөрә.
Ҡоштар ҙа ҡошсоҡтарын
Өйрәтә бит йөҙөргә.

(«Аҡбуҙат» журналынан)

**2.** Яңы һүҙҙәр менән таныш.

| | | |
|---|---|---|
|  ҡайын еләге |  ҡурай еләге |  ер еләге |
|  муйыл |  сейә |  ҡарағат |

**3.** Өндәрҙе дөрөҫ әйтеп, тел төҙәткесте уҡы.

Ға-ға-ға — әйҙә киттек урманға,
Шә-шә-шә — урманда еләк бешә.
Ле-ле-ле — ауыҙ итәйек әле,
Ге-ге-ге — ҡалай тәмле еләге.

(Балалар фольклорынан)

П **4.** Шиғырҙы тасуири уҡығыҙ, һорауға яуап бирегеҙ.

## Нисә еләк?



Әсәйгә — ике еләк,
Атайға — ике еләк,
Ике еләк — ҡустыма
Йыйып алдым усыма.
Ә бер еләк үҙемдә,
Был икәүһе — күҙемә,
Тағы ла ике еләк
Ҡулдарым өсөн кәрәк.
Нисә еләк тотҡанмын,
Ә нисәһен ҡапҡанмын?

(Ғәлиә Ғәлиәскәрова)

**бешә, өлгөрә** — созревает
**алма** — 1) яблоко;
2) не бери

**ауыҙ итәйек** — попробуем
**ҡалай тәмле** — как вкусно
**ҡошсоҡ** — птенец

# 37 Нимә? Нимә эшләй?
# Что? Что делает?

А **1.** Тексты тыңла.

## Емеш салаты

Ике бананды, бер алманы, бер грушаны, бер әфлисунды турағыҙ, унан 200 грамм йогурт менән болғатығыҙ. Өҫтөнә ҡарағат һәм киви киҫәктәрен һалығыҙ.

(«Аҡбуҙат» журналынан)

П **2.** Диалогты ролләп уҡығыҙ, оҡшаш диалог төҙөгөҙ.

— Ҡыҙым, әйҙә баҡсаға барайыҡ.
— Ә еләк бешкәнме?
— Ер еләге бешкән.
— Ә ҡурай еләге?
— Ҡурай еләге әле өлгөрмәгән.

**3.** Шиғырҙы тасуири уҡы.

## Еләктәр

Ҡурай еләге
Бешкән,
Ер еләге лә
Бешкән,
Ҡайын еләге
Бешкән —
Беҙҙең баҡса
Килешкән!

(Фаҡиһа Туғыҙбаева)



**баҡса** — сад, огород

**өлгөрмәгән** — не созрел, не поспел
**баҡса килешкән** — (зд.) урожай уродился

## 38 Нимә? Нимә эшләй?
## Что? Что делает?

**1.** Тексты тыңла.

### Сәскә менән бал ҡорто

Баҡсалағы алмағас ап-аҡ сәскә атты. Бәләкәй генә бал ҡорто алмағасҡа аптырап ҡараны:

— Ниндәй матур! Һин ҡышмы? — тип һораны.

— Мин алмағас.

— Ҡыш булмағас, ниңә һин ап-аҡ?

— Минең сәскәләрем аҡ. Әйҙә уларҙың һутын эс. Беләһеңме, минең сәскәләрем алмаға әйләнә бит. Ҡыҙыл алмаларымды балалар ярата.

(Йомабикә Ильясованан)

**2.** Яңы һүҙҙәр менән таныш.

|  |  |  |  |
| --- | --- | --- | --- |
| япраҡ ҡойола | ҡоштар йылы яҡҡа китә | йәнлектәр ҡышҡа әҙерләнә | ямғыр яуа |

П **3.** Тексты уҡығыҙ, уға исем бирегеҙ.

Көҙ етте. Урман һары, ҡыҙыл төҫкә инде. Ағастар япраҡтарын ҡоя.

Йәнлектәр ҙә ҡышҡа әҙерләнә. Тейен, ҡуян, айыу, бүреләр йөндәрен алмаштыра. Бурһыҡтар, тейендәр аҙыҡ әҙерләй. Сентябрь аҙағында терпеләр йоҡоға тала.

**ап-аҡ** — белым-бело
**ҡышҡа** — к зиме

**аптырап ҡараны** — посмотрел с удивлением
**әйләнә** — превращается
**йоҡоға тала** — засыпает
**йөндәрен алмаштыра** — меняют мех

## 39 Нимә? Нимә эшләй?
## Что? Что делает?

А **1.** Тексты тыңла, һорауҙарға яуап бир.

### Көҙ

Көҙ етте. Көндәр һалҡынайҙы. Парктарҙа, урмандарҙа ағастарҙың япраҡтары ҡойола. Һары, ҡыҙыл, һоро япраҡтар ер өҫтөн ҡаплаған.

Хәҙер урманда ҡош тауыштары ишетелмәй. Улар йылы яҡҡа осоп киткән. Беҙҙә ҡышлай торғандары ғына ҡалған. Беҙ уларға тағараҡтар әҙерләнек.

1. Текста көҙҙөң ниндәй биҙәктәре һүрәтләнә?
2. Ҡоштар тормошондағы ниндәй үҙгәреш тураһында әйтелә?

**2.** Яңы һүҙҙәр менән таныш.

| | | |
|---|---|---|
|  ҡыяр |  кишер |  һуған |
|  картуф |  сөгөлдөр |  кәбеҫтә |

**3.** Шиғырҙы тасуири уҡы.

Байрам бөгөн, байрам бөгөн,
Тик ул ябай түгелдер.
Түрҙән килеп урын алған
Картуф, кишер, сөгөлдөр.
Үҫтергәнгә үҙебеҙ,
Мул уңышлы көҙөбөҙ.

(Гөлфиә Юнысова)

**йәшелсә** — овощи
**эре** — крупный (-ая, -ое, -ые)
**ваҡ** — мелкий (-ая, -ое, -ие)
**әсе** — горький (-ая, -ое, -ие)
**оҙон** — длинный (-ая, -ое, -ые)

**ябай түгел** — не простой
**урын алған** — занял место
**үҫтергәнгә үҙебеҙ** — вырастили сами
**мул уңышлы** — очень урожайный

# 40 Нимә? Нимә эшләй?
## Что? Что делает?

А **1.** Тексты тыңла.

Винегрет эшләр өсөн ике кишер, бер сөгөлдөр, дүрт картуф, бер баш һуған, ике тоҙло ҡыяр, тоҙланған кәбеҫтә, бер банка консерваланған борсаҡ кәрәк. Кишер, сөгөлдөр, картуфты бешерәбеҙ, шаҡмаҡлап турайбыҙ. Һуған менән ҡыярҙы ваҡлайбыҙ, борсаҡ һәм кәбеҫтәне өҫтәп, үҫемлек майы, тоҙ һалып бутайбыҙ.

Ашығыҙ тәмле булһын!

(«Аҡбуҙат» журналынан)

**2.** Яңы һүҙҙәр менән таныш.

| | | |
|---|---|---|
|  борос |  ҡабаҡ |  һарымһаҡ |
|  ҡауын |  шалҡан |  помидор |

**3.** Шиғырҙы тасуири уҡы.

## Яҙ

Шатлыҡтар өләшеп һәр кемгә
Яҙ килә, яҙ килә еремә.
Иҫә ел наҙланып, йыуанып,
Тамсылар бейешә ҡыуанып.
Кемгәләр сер һөйләй гөрләүек,
Ҡояшты уйната күләүек.
Күҙәтеп быларҙың барын да,
Сыйырсыҡ маҡтаны йырында.
Уның саф моңдарын ишетеп,
Сәскәләр йылмайҙы ҡар тишеп.

(Миңлеяр Дилмөхәмәтов)

Т **4.** Әкиәттән өҙөк уҡығыҙ, дауам итегеҙ. Һорауға яуап бирегеҙ.

Борон-борон заманда ултыртҡан, ти, бабай шалҡан. Шалҡан бик ҙур булып үҫкән. Бабай шалҡанды тарта-тарта, ти, тартып сығара алмай. Саҡырған, ти, бабай әбейҙе. Әбей бабайға, бабай шалҡанға йәбешкән, тарталар, ти, тарталар, тартып сығара алмайҙар. Саҡырған әбей ейәнсәрен. Ейәнсәре әбейгә, әбей бабайға, бабай шалҡанға йәбешкән, ти. Тарталар-тарталар, тартып сығара алмайҙар. Саҡырған, ти, ейәнсәре этте...

(Рус халыҡ әкиәте)

Нисек уйлайһығыҙ, әкиәттә кем иң көслөһө? Фекерегеҙҙе иҫбатлағыҙ.

П **5.** Һынамыштарҙы уҡығыҙ, әңгәмәләшегеҙ.

Мартта яуған ҡар баҡса емешенә бик ярар.

1 мартҡа тиклем ҡара ҡарға күренһә, ҡар тиҙ китер.

Йылғаларҙа боҙ төндә китһә, ашлыҡ уңыр.

Февраль ҡарға бай, апрель һыуға бай.

Это интересно

**Картофель** появился в Европе только в XVI веке. Сначала его выращивали в садах как цветок, потом варили варенье из его ягод, позже стали есть клубни. В начале XIX века картофель был так редок, что его дарили друг другу в праздники. Пока картофеля не было, люди ели **репу**. А репу когда-то сеяли изо рта. У репы очень мелкие семена: в 1 кг их больше миллиона, и вручную их просто не разбросать. Однако и плевать — дело не простое, поэтому лучшие «плевальщики» ценились в народе.

http://www.interesnye_fakty_ob_ovoshhax

**файҙалы** — полезный (-ая, -ое, -ые)
**тәмле** — вкусный (-ая, -ое, -ые)
**һутлы** — сочный (-ая, -ое, -ые)

**шаҡмаҡлап** — кубиками
**ваҡлайбыҙ** — измельчаем
**бутайбыҙ** — размешиваем

# 41 Минең яратҡан миҙгелем
# Моё любимое время года







# 42 Минеӊ яратҡан миҙгелем
## Моё любимое время года





## 43 Ниндәй?
## Какой?

А **1.** Тексты тыңла.

Минең шатлығымдың сиге юҡ. Уның башы ҡара бәрхәт түбәтәй менән бер пар резина галош булды. Байрам бүләге тип, уларҙы Мортаза ағайым алып ҡайтты. Шуның өҫтәүенә, Оло инәйем, үҙемә үлсәп, аҡ буйлы ҡыҙыл киндер ыштан теген ҡуйҙы — ике кеҫәле. Ә анау кәштәгә эленгән зәңгәр нимә ул? Миңә тип тектерелгән сатин күлдәк ул. Был байрамға мине ана ҡалай баштан-аяҡ кейендерҙеләр. Ҡыҙыҡ инде, өҫтөмә яңы, матур кейем кейгәс, нисектер күңелем дә бөтәйеп, йәмләнеп киткәндәй булды...

(Мостай Кәрим)

П **2.** Диалогты роллэп уҡығыҙ, үҙгәртеп төҙөгөҙ.

— Сәләм, Айгөл!
— Һаумы, Альбина!
— Ҡайҙа киттең?
— Ҡунаҡҡа киттем.
— Күлдәгең бик матур. Һиңә нык килешә.
— Рәхмәт, Альбина!

! Был күлдәгең һиңә бик килешә! Свитерың бик матур икән! Йылы тәнеңдә туҙһын! Башлығың бик модалы икән! Ҡотло булһын!

**ыштан** — штаны
**кеҫә** — карман
**күлдәк** — рубашка, платье

**шатлығымдың сиге юҡ** — нет пределов радости
**тектерелгән** — сшитый
**күңелем бөтәйеп, йәмләнеп киткәндәй булды** — на душе стало радостно
**бәрхәт** — бархат
**баштан-аяҡ кейендерҙеләр** — одели с головы до ног

## 44 Ниндәй? Какой?

А **1.** Тексты тыңла, һорауҙарға яуап бир.

### Күлдәк

Борон заманда Төлкө менән Терпе йәшәгән, ти. Төлкөнөң күлдәге матур, йомшаҡ, йылы булған. Ә Терпенең күлдәге йоҡа, һоро төҫтә икән.

— Минең күлдәк иң матуры! Әй, Терпекәй, һинең күлдәгең ер төҫөндә. Һине берәһе лә яратмай, — тип маҡтанған Төлкө.

Терпе быға бик асыуланған һәм ул үҙенә икенсе күлдәк алырға булған. Ул энәле күлдәк һайлаған.

Тағы осрашҡандар былар. Төлкө Терпенән көлөп, унының күлдәген тотоп ҡарамаҡсы булған. Терпегә ҡулын тейҙергән дә шунда уҡ ҡысҡырып илап ебәргән. Терпе ана шулай Төлкөгә яуап ҡайтарған.

Шунан башлап Терпе энәле күлдәктә йөрөй икән.

(«Аҡбуҙат» журналынан)

Был һөйләмдәр тексҡа тура киләме?

1. Төлкөнөң күлдәге йылы, йомшаҡ булған.
2. Терпенең күлдәге йәшел төҫтә икән.
3. Төлкө маҡтанған.
4. Терпе асыуланған.
5. Төлкө энәле күлдәк һайлаған.
6. Төлкө илап ебәргән.

П **2.** Диалогтарҙы роллəп уҡығыҙ, һөйләп өйрәнегеҙ.

1. — Минең туныңды бирегеҙ әле.
— Номерығыҙ ҡайҙа?
— Бына.
— Туныгыҙҙы алығыҙ.
— Рәхмәт.

2. — Әсәйем миңә яңы күлдәк алды. Ул бик матур.
— Күрһәт әле.
— Бына. Кейеп күрһәтәйемме?
— Йә, кей... Ниндәй матур! Килешә! Килешә! Йылы тәнеңдә туҙһын!
— Рәхмәт!

3. — Әсәй, мин уйнарға сығам.
— Йылы салбарыңды кей, балам.
— Киймәйем! Уның менән эҫе.
— Һыуыҡ еле бар бит. Киймәһәң, ауырырһың.

Т **3.** Уйнап алығыҙ! Бер уҡыусы таҡта янында хәрәкәттәр менән ниндәйҙер кейемде кейеп күрһәтә. Ҡалған уҡыусылар ниндәй кейемде кейгәнен әйтәләр.

### Это интересно

Среди указов Петра I был такой, в котором повелевалось пришивать пуговицы на лицевую сторону рукава солдатского мундира. На первый взгляд, они там бесполезны, но в то время указ имел ясную цель: отучить солдат, большинство из которых набирались из крестьянской среды, вытирать рукавом рот после еды, чтобы дольше сохранить дорогое сукно.

http://muzey-factov.ru/tag/wear

**йоҡа** — тонкий (-ая, -ое, -ие)
**йылы** — тёплый (-ая, -ое, -ые)
**һоро** — серый (-ая, -ое, -ые)

**ҡулын тейҙергән** — потрогал
**бөтәһе лә** — все
**береһе лә** — никто
**энәле күлдәк һайлаған** — выбрал игольчатое платье

## 45 Ниндәй? Какой?

А **1.** Тексты тыңла, һорауҙарға яуап бир.

### Минеке!

Берәй яңы әйбер күрһә, Рөстәм:

— Ми-не-ке! — тип ҡысҡыра.

Бер көн әсәһе Әлиәгә күлдәк алып ҡайтты. Һеңлеһе уны кейеп ҡарарға ла өлгөрмәне, Рөстәм:

— Ми-не-ке! — тип тартып алды ла йәшереп тә ҡуйҙы. Әлиә иланы, ләкин Рөстәм күлдәкте бирмәне.

Әлиә күлдәкте эҙләп тапты. Уны кейҙе лә көҙгө алдына килеп баҫты. Ҡара әле, әсәһе ниндәй матур күлдәк алған! Ҡыҙыл ерлеккә ап-аҡ күбәләктәр төшөрөлгән. Күлдәк төҫөндәге ҡыҙыл туфлийын кейеп алды. Шунда Рөстәм:

— Ми-не-ке! Күлдәк минеке! — тип күлдәккә тотондо.

Тартыша торғас, күлдәктең еңе йыртылып сыҡты.

(Фаиһа Тоғыҙбаева)

1. Кем Әлиәгә күлдәк алған?
2. Ни өсөн Әлиә иланы?
3. Рөстәм ниндәй малай?
4. Рөстәм дөрөҫ эшләнеме?

**2.** Шиғырҙы тасуири уҡы.

## Яңы күлдәк

Ниңә Гөлсөм пальтоһының
Төймәләрен элмәгән?
Әллә инде бөгөн көндөң
Һалҡынлығын белмәгән?

Ҡарағыҙ әле — уның бит
Яңы күлдәк өҫтөндә.
Төймәһен элмәй йөрөй ул
Бөгөн шуның өсөн дә.

(Фәүзиә Рәхимғолова)

Был һөйләмдәр текстҡа тура киләме?
1. Гөлсөм пальто төймәләрен элгән.
2. Гөлсөмдөң күлдәге яңы.
3. Бөгөн көн йылы.
4. Гөлсөм шатланып йөрөй.

Т **3.** Уйнап алығыҙ! Таҡта янында бер уҡыусы хәрәкәттәр менән кешенең төрлө эштәрен күрһәтә. Ҡалған уҡыусылар уны күҙәтәләр, аҙаҡ һөйләм төҙөп әйтәләр.

**Өлгө:** Морат итек таҙарта. Әлиә кейем үтекләй.

**таҙарта** — чистит
**йыуа** — моет, стирает
**үтекләй** — гладит
**ҡаға** — отряхивает

**яңы әйбер** — новая вещь
**тартып алды** — вырвал
**ҡыҙыл ерлеккә** — на красный фон

## 46 Ниндәй? Какой?

**А** **1.** Тексты тыңла.

### Бер һүҙ

Гөлкәй бөгөн мәктәпкә яңы кофта кейеп килде. Кисә тыуған көнөнә әсәһе алып ҡайтҡайны. Кофта бик оҡшаны уға.

Ҡыҙҙар:

— Ҡайһылай матур, — тип уның кофтаһын тотоп-тотоп ҡаранылар.

— Йылы тәнеңдә туҙһын! — тине Лилиә. Фәниә:

— Ҡотло булһын! — тип уның кеҫәһенә бер кәнфит килтереп һалды.

Гөлкәйҙең кәйефе күтәрелде:

— Рәхмәт!

Шул мәл Ғаяндың йәмһеҙ тауышы ишетелде:

— Маҡтансыҡ! Маҡтаныр өсөн кейеп килгән бит ул!

Әле генә йылмайып торған Гөлкәйҙең йөҙөндәге ҡыуаныс юҡҡа сыҡты. Бер насар һүҙҙән уның кәйефе ҡырылды.

(Венер Исхаҡовтан)

**П** **2.** Һөйләмдәрҙе уҡығыҙ. Эште белдергән һүҙҙәрҙең мәғәнәләрен әйтегеҙ.

| | |
|---|---|
| Һин кей.<br>Ул кейә. | Һин ҡурсаҡты кейендер.<br>Ул ҡурсаҡты кейендерә.<br>Ул ҡурсаҡты кейендерҙе. |

| | |
|---|---|
| Һин кейен.<br>Ул кейенә. | Һин кейҙер (кейендер).<br>Ул кейҙерә (кейендерә, кейендерҙе). |

**3.** Һүрәт буйынса текст төҙө.

**Өлгө:** Мин ҡурсаҡты кейендерәм. Мин ҡурсаҡҡа күлдәк кейҙерәм. Бына мин ҡурсаҡты кейендерҙем.



Һин дә ҡурсаҡты кейендер. Салбар, свитер кейҙер. Хәҙер **кейендер** һүҙенең мәғәнәләрен әйтеп ҡара.

**4.** Шиғырҙы тасуири уҡы.

## Сәскәле күлдәк

Кисә миңә магазиндан
Әсәйем алды күлдәк.
Сәскәләр төшкән күлдәктә
Сәскә һайын күбәләк.

(Гөлфиә Юнысова)

Это интересно

**Одеть** — кого-что во что или чем. Облечь кого-л. в какую-л. одежду. **Одеть ребёнка, больного, раненого.**

**Надеть** — что. Натянуть, надвинуть (одежду, обувь), покрывая, облекая что-нибудь. **Надеть костюм, юбку, пальто, маску, наушники...**

Сказанное подтверждает Новелла Матвеева:

«Одень», «надень»... Два слова
Мы путаем так бестолково!
Морозный выдался рассвет,
Оделся в шубу старый дед.
А шуба, стало быть, надета.
«Одень», «надень»... Давай глядеть:
Когда одеть и что надеть.
Я полагаю, что на деда
Три шубы может быть надето.
Но я не думаю, что дед
На шубу может быть надет!

http://muzey-factov.ru/tag/wear

**кей** — надень
**ул кейә** — он надевает
**һин кейен** — ты оденься
**кейендер** — одень
**кейендерә** — одевает
**кейендерҙе** — одел

**маҡтансыҡ** — хвастунишка
**кәйеф** — настроение
**йәмһеҙ тауыш** — некрасивый голос
**ҡыуаныс** — радость

## 47 Ниндәй? Какой?

А **1.** Тексты тыңла.

### Яңы күлдәк

Гөлниса әсәһе менән магазинға барҙы. «Күлдәктәр» бүлегендә һатыусы Гөлнисаға күлдәк һайлашты.

— Бына матур күлдәк, — тип ҡыҙыҡайға аҡ сәскәләр төшөрөлгән ҡыҙыл күлдәкте күрһәтте. Гөлниса уны кейеп ҡараны. Килешә. Етмәһә, уның бантигы ла ошо күлдәк төҫлө ҡып-ҡыҙыл бит әле.

— Әсәй, ошоно алайыҡ, — тине Гөлниса, ҡыуанып.

— Оҡшағас, алайыҡ һуң, ҡыҙым.

Ҡыҙҙың матурлыҡты таныуы һатыусы апайға ла оҡшаны.

— Исемең нисек? — тип һораны ул.

— Гөлниса.

— Исемең дә матур. Күлдәгең дә килешә.

Гөлниса менән әсәһе һатыусыға рәхмәт әйтте.

(Фаҡиһа Туғыҙбаеванан)

**2.** Уҡы. Хәтереңдә ҡалдыр!

Кейемеңде һәр саҡ таҙа тот.
Салбарыңды / юбкаңды үтекләп тор.
Туфлийыңды / ботинкаңды таҙартып кей.
Өҫ кейемеңде элгескә эл.
Мәктәптә бөхтә йөрө.

**3.** «Кемдең кейеме?» уйынын уйнап алығыҙ.

Алып барыусы кластағы берәй уҡыусының кейемен һүрәтләй.

— Был ҡыҙҙың күлдәге күк төҫтә, туфлийы аҡ, ойоғо аҡ.

Йәки:

— Был малай зәңгәр күлдәк, ҡара салбар, ҡара туфли (ботинка) кейгән.

Кем үҙенең кейемен һүрәтләгәнде аңлай, шул таҡта алдына сығып баҫа. Ҡалғандар кейемдең дөрөҫ һүрәтләнгәнме икәнен тикшерә.

Это интересно

Пуговицы появились задолго до нашей эры, но использовались только как украшение. Примерно в XII – XIII веках о пуговицах вновь узнали в Европе, но теперь у них появилось и функциональное значение застёгивания в петли, а не только декоративное. В Средние века пуговицы стали настолько популярным аксессуаром, что по их количеству на одежде можно было судить о статусе владельца. Например, на одном из нарядов французского короля Франциска I насчитывалось 13 600 пуговиц.

http://muzey-factov.ru/tag/wear

**таҙа** — чистый (-ая, -ое, -ые)
**бөхтә** — аккуратный (-ая, -ое, -ые)
**элгес** — вешалка

**бүлек** — отдел
**һайлашты** — помогла выбрать
**төшөрөлгән** — нарисован
**килешә** — идёт

## 48 Ниндәй? Какой?

A **1.** Тексты тыңла.

### Тере эшләпә

Өҫтәлдә эшләпә ята, Васька ҡушаматлы бесәй иҙәндә уйнап йөрөй ине. Володя менән Вадик һүрәт төшөрә. Ҡапыл эргәләрендә нимәлер иҙәнгә төштө. Әйләнеп ҡараһалар — эшләпә. Володя эшләпәне ҡулына алмаҡсы булғайны, ҡысҡырып ебәрҙе.



— Ни булды? — тип аптыраны Вадик.

— Ул тере лә баһа!

Вадик, яҡыныраҡ килеп, эшләпәгә ҡараны. Тегеһе уға ҡарай шыуыша башламаһынмы!

— Ай! — тип ҡысҡырып ебәрҙе лә малай диванға һикерҙе. Уның артынан Володя ла.

Эшләпә иҙән уртаһында туҡтаны. Малайҙар ҡурҡып ҡатып ҡалды. Шул саҡ: «Мыяу!» — тигән тауыш ишетелде. Күп тә үтмәй, эшләпә аҫтынан ҡойроҡ күренде.

(Николай Носовтан)

П **2.** Диалог төҙөгөҙ.

— Был кемдең туны (курткаһы)?

— Был минең туным (курткам).

— Был кемдең шарфы (бейәләйе)?

— Был Әлфиәнең шарфы (бейәләйе).

— Был кемдең башлығы (бүрке)?

— Был башлыҡ Азаттыҡы (бүрек).

— Был кемдең итеге (ботинкаһы)?

— Был минең итегем (ботинкам).

— Был кемдең жилеты (блузкаһы)?

— Был минең жилетым (блузкам).

Т **3.** Мәҡәлде уҡығыҙ, мәғәнәһен аңлатығыҙ.

Кейемгә ҡарап ҡаршы алалар, аҡылға ҡарап оҙаталар.

**4.** Шиғырҙы уҡы, ятлап ал.

Тышта буран ҡотора,
Сәйҙә илап ултыра:
— Бесәйем сығып киткән,
Аҙашып үлер микән?..

Юҡҡа илаған Сәйҙә,
Хәйләкәр бит бесәй ҙә:
Шәп йылы оя тапҡан,
Быймаға инеп ятҡан.

(Рәмзәнә Абуталипова)

Это интересно

Сегодня общепринятыми цветами одежды для девочек и мальчиков являются розовый и синий соответственно. Такое разделение сформировалось только в 1940-е годы. А до этого в детском выпуске журнала «Earnshow's» от 1918 года говорилось: «Розовый нужно выбирать для мальчиков, а синий для девочек, так как розовый цвет более сильный и твёрдый, а синий — более изящный и утончённый».

http://muzey-factov.ru/tag/wear

**тун** — шуба
**бейәләй** — варежки
**бүрек** — шапка

**нимәлер иҙәнгә төштө** —
что-то упало на пол
**тере эшләпә** — живая шляпа
**шыуыша** — ползёт
**һикерҙе** — прыгнул
**ҡойроҡ** — хвост

## Минең тыуған көнөм Мой день рождения

# 49 Ҡасан? Когда?

**А** **1.** Тексты тыңла, һорауҙарға яуап бир.

Тиҙҙән Нәйләнең тыуған көнө. Бик көттө ул был көндө. Әсәһе менән ҡунаҡтарға меню төҙөнөләр. Төрлө тәмлекәстәр бешерҙеләр. Өйҙө матур итеп йыйыштырып ҡуйҙылар. Нәйлә матур күлдәген дә үтекләп әҙерләне. Бына көткән көн дә етте. Ҡунаҡтар килеүгә өҫтәлдә һый әҙер ине. Туғандары, дуҫтары Нәйләне ҡотланы, яғымлы һүҙҙәр әйтте. Матур бүләктәр ҙә алып килгәйнеләр. Бергәләп уйындар уйнанылар, йырҙар йырланылар. Тыуған көн күңелле булды.

1. Нәйлә тыуған көнөнә нисек әҙерләнә?
2. Ҡыҙҙың тыуған көнөнә кемдәр килгән?
3. Тыуған көн нисек үтте?
4. Һин тыуған көнөңдө нисек үткәрәһең?

**П** **2.** Диалогты роллəп уҡығыҙ.

— Ринат, бөгөн минең тыуған көнөм.
— Ғәфү ит... Ҡотларға онотҡанмын. Ой, юҡ, ысын йөрәктән ҡотлайым! Һиңә һаулыҡ, бәхет, уңыштар теләйем.

— Ринат, у меня сегодня день рождения.
— Прошу прощения... Забыл поздравить. Ой, нет, сердечно поздравляю! Желаю тебе здоровья, счастья, успехов.

**3.** Шиғырҙы уҡы. Һый ниндәй байрамда булған?

## Байрам

Нәйләнең тыуған көнөнә
Алып килдек бүләктәр:
Ҡурсаҡ, айыу, шар, открытка...
Открыткала — теләктәр.
Нәйләбеҙҙең ҡыуанысы
Хатта өйгә һыйманы,
Бәлеш, торт, сәксәктәр менән
Беҙҙе бик шәп һыйланы.

(Мәрхәбә Дәүләтшина)

**тыуған көн** — день рождения
**тәмлекәстәр** — сладости
**һый** — угощение
**бүләк** — подарок

**тиҙҙән** — скоро
**көттө** — ждала
**йыйыштырыу** — убираться
**яғымлы һүҙҙәр** — ласковые слова
**күңелле** — весело

## 50 Ҡасан? Когда?

А **1.** Тексты тыңла, һорауҙарға яуап бир.

Иртәгә Гүзәлдең өләсәһенә алтмыш йәш тула. Атаһы менән Гүзәл сәскә магазинынан матур сәскәле гөл һатып алдылар. Гүзәл бик ҡыуанды.

— Иртәнсәккә тиклем гөлдөң сәскәһе шиңмәҫме? — тип һораны Гүзәл атаһынан.

— Ҡул менән теймәһәң — шиңмәҫ, — тине атаһы.

Иртәгеһенә Гүзәлдең атаһы, сәскәһеҙ гөлдө күреп:

— Ҡыҙым, сәскәһе ҡайҙа булған? — тип һораны.

— Мин, шиңмәһен тип, уны һыуға ултырттым, — тине Гүзәл. Ул, йүгереп барып, стакандан сәскәне алды. Ләкин сәскә һулығайны инде.

1. Гүзәлдең өләсәһенә нисә йәш тула?
2. Гүзәл менән атаһы ниндәй бүләк алғандар?
3. Ни өсөн сәскә һулыған?
4. Һеҙ өләсәйегеҙгә ниндәй бүләк алыр инегеҙ?

П **2.** Диалогты роллəп уҡығыҙ, оҡшаш диалог төҙөгөҙ.

— Ҡәҙерле өләсәй, тыуған көнөң менән ҡотлайым! Һиңә уңыштар, бәхет, сәләмәтлек теләйем. Был сәскәләр һиңә бүләк.

— Ниндәй матур сәскәләр! Ҙур рәхмәт һиңә!

Т **3.** Шиғырҙы тасуири уҡығыҙ. «Аҡ ҡалас» уйынын уйнап алығыҙ.

Шамилдың тыуған көнөндә
Беҙ бешерҙек аҡ ҡалас.
Бына шундай ул бейек,
Бына шундай тәпәшәк,

Бына шундай киңлектә,
Бына шундай тарлыкта.
Аҡ ҡалас, аҡ ҡалас,
Теләгәнеңде ал да ҡас!



**гөл** — комнатный цветок

**ҡыуанды** — обрадовалась
**шиңеү, һулыу** — увядать, завянуть

## 51 Ҡасан? Когда?

А **1.** Тексты тыңла, һорауҙарға яуап бир.

### Беҙҙең дуҫ

Олатайым атайымдың тыуған көнөнә компьютер алып бирҙе. Мин дә, атайым да быға бик ҡыуандыҡ. Атайым компьютерҙы өҫтәлгә ҡуйҙы ла:

— Был беҙҙең яҡшы дуҫ булыр, — тине.

Хәҙер атайым компьютерҙа нимәлер иҫәпләй, әсәйем шиғыр баҫа. Мин уйын уйнайым, һеңлем компьютерҙа һүрәт төшөрә.

Ысынлап та, компьютер беҙҙең дуҫ булды.

(Фәрзәнә Ғөбәйҙуллинанан)

1. Олатаһы нимә бүләк иткән?
2. Компьютерҙа нимәләр эшләргә була?
3. «Компьютер — беҙҙең дуҫ» тигән менән килешәһеңме?

П **2.** Диалогты роллəп уҡығыҙ.

— Атай, Алмасҡа велосипед алғандар.
— Бик һәйбәт булған.
— Миңә лә велосипед алайыҡ әле.
— Ярай, алырбыҙ.
— Ҡасан?
— Тыуған көнөңә.
— Ур-р-ра, минең велосипедым була!

**3.** Тыуған көнөңдә көсөк бүләк итһәләр, һин нисек яуап бирер инең? Оҡшаған яуапты һайлап ал.

— Ҙур рәхмәт!
— Был нимә? Минең көсөгөм бар инде.
— Ниндәй матур көсөк! Рәхмәт.
— Миңә күптән көсөк кәрәк ине. Рәхмәт.
— Һинең көсөгөң миңә кәрәкмәй! Үҙеңә булһын!
— Рәхмәт, мин бик шат!

**дуҫ** — друг
**иҫәпләй** — считает

**үҙеңә булһын** — оставь себе
**шиғыр баҫа** — печатает стихи

Это интересно

Впервые детские дни рождения начали отмечать в Германии.

В XIII столетии немецкие крестьяне придумали ритуал дня рождения ребёнка. Детей будили на рассвете песнями и дарили им пирог со свечками. Виновник торжества загадывал желание и задувал свечи. Чтобы оно сбылось, нельзя было о нём рассказывать. Кроме того, по традиции все свечи необходимо было задувать на одном выдохе. Количество свечей на нём соответствовало возрасту именинника. На день рождения подарки приносил особенный гном.

На территории России день рождения начали праздновать в XVII веке. Накануне этого события выпекали каравай и пироги, пели песни.

## 52 Нимә менән? Нисек?
## На чём? Как?

А **1.** Тексты тыңла, һорауҙарға яуап бир.

### Европа — Азия

Башҡортостан Рәсәйҙең урта өлөшөндә урынлашҡан. Өфө ҡалаһынан Европаға ла, Азияға ла төрлө транспорт менән барып була.

Самолёт пассажирҙарҙы илебеҙҙең төрлө ҡалаларына ташый.

Теплоход менән Ағиҙелдән Кама, Волга йылғаларына сығаһың. Унан Мәскәү, Санкт-Петербург, Волгоград ҡалаларына барып була. Ял итеүселәр теплоходта Каспий һәм Ҡара диңгеҙгә тиклем йөҙәләр.

Автобустар кешеләрҙе Өфөнән Һамар, Ырымбур, Пермь, Екатеринбург, Силәбе кеүек ҙур ҡалаларға өҙлөкһөҙ ташып тора.

Европанан Азияға, Азиянан Европаға елдереүсе поездар Өфө, Дим, Шишмә станциялары аша үтә.

Әгәр берәй ергә барырға булһаң, рәхим ит: һине транспорт теләгән ереңә илтеп ҡуйыр.

(Календарҙан)

1. Өфөнән теплоход менән ниндәй ҡалаларға барып була?

2. Поездар Башҡортостандың ниндәй станцияларында туҡтала?

3. Автобус менән ҡайҙа барырға мөмкин?
4. Һеҙ йәшәгән урында ниндәй транспорт йөрөй?



**Т** **2.** Һорауҙарға телдән яуап бирегеҙ.

Сәйәхәт итергә яратаһығыҙмы? Нимәлә сәйәхәт итеү оҡшай (автобуста, поезда, самолётта, атта, велосипедта, йәйәү һ. б.)?

**П** **3.** Диалогты роллəп уҡығыҙ, үҙгәртеп төҙөгөҙ.

— Сәләм, Әлфиә!
— Һаумы, Гөлнур!
— Байрам көндәрендә өйҙә булаһыңмы?
— Юҡ, Әбйәлилгә өләсәйемдәргә барам.
— Ҡасан китәһең?
— Белмәйем. Әле әсәйем билет алмаған.
— Ярай, һиңә хәйерле юл!

**сәйәхәт итә** — путешествует
**йәйәү** — пешком

**урынлашҡан** — расположился
**аша** — 1) ешь; 2) через
**атта** — на лошади

## 53 Нимә менән? Нисек?
## На чём? Как?

А **1.** Тексты тыңла, һорауҙарға яуап бир.

Уралдың бөгөн кәйефе шәп. Улар класс менән Ағиҙел буйына сығалар. Урал рюкзак йыя башланы. Әсәһе ваҡ бәлеш бешергәйне. Рюкзакка бәлеш, термос менән сәй һалды. Планшетты ла онотманы. Көнө буйы йылға буйында планшетта уйнарға кәрәк бит.

1. Һеҙ тәбиғәткә ял итергә сығаһығыҙмы?
2. Урал рюкзагын дөрөҫ йыйғанмы?
3. Һеҙ ял итергә нимә алыр инегеҙ?
4. Ял иткәндә планшет кәрәкме?

П **2.** Ошо билдәләрҙе беләһегеҙме? Улар нимә аңлата?



Т **3.** Тәбиғәттә үҙеңде нисек тоторға кәрәк? Проект төҙөгөҙ.

**кәйеф** — настроение
**көнө буйы** — целый день

## 54 Нимә менән? Нисек?
## На чём? Как?

А **1.** Тексты тыңла, һорауға яуап бир.

Әсәйем Төркиәгә барырға билет алған. Өләсәйем:

— Башҡортостанда ниндәй матур урындар бар. Әллә ҡайҙа Төркиәгә йыйынғандар, — ти.

— Өләсәй, ә һин ҡайҙа барыр инең?

— Мин, улым, «Янғантау» шифаханаһына барыр инем. Янғантауҙан бик файҙалы пар сыға, ул быуындарҙы дауалай.

— Ярай, өләсәй, үҫкәс, һиңә путёвка алып бирермен.

Башҡортостандың ҡайһы райондарында булғаның бар?

П **2.** Диалогты ролләп уҡығыҙ, үҙгәртеп төҙөгөҙ.

— Алло, Урал, сәләм! Хәлдәр нисек?

— Сәләм, Тимур! Хәлдәр яҡшы.

— «Ассы» шифаханаһы оҡшаймы?

— Эйе, бында бейек тауҙар, ҡарағайҙар күп. Хатта айыуҙар ҙа бар, тиҙәр.

— Нисек ял итәһең?

— Көн дә велосипедта, роликта йөрөйөм, бассейнда йөҙәм, рәхәт.

**Т** **3.** Янғантауҙың тарихы буйынса проект эше төҙөгөҙ.

**йыйынғандар** — собрались

**быуындар** — суставы

## 55 Нимә менән? Нисек?
## На чём? Как?

**А** **1.** Тексты тыңла, һорауҙарға яуап бир.

### Өфө урамында

Өфө ҡалаһында көн һайын маршрут буйынса автобустар, троллейбустар, трамвайҙар пассажирҙар ташый. Черниковка, Сипайлово, Шаҡша, Дим биҫтәләренә барыу хәҙер бер ни тормай. Маршрутты бел һәм ултыр ҙа кит.

Башҡортостанда хәҙер машиналар эшләнә. Өфөлә — троллейбустар, Нефтекамала — автобустар, Бәләбәйҙә еңел машиналар йыйыла.

Трамвайҙы Башҡортостан Силәбе өлкәһенән һатып ала.

1. Өфө ҡалаһында йөрөгән транспорт тураһында нимәләр белдең?
2. Текста транспорттың ниндәй төрө тураһында әйтелмәгән?

**2.** Һүрәттәрҙе ҡара. Уларҙы сағыштыр һәм һөйләмдәр төҙө.

**Ҡулланыу өсөн һүҙҙәр:** ҡыйбатыраҡ / арзаныраҡ; шәберәк / яйыраҡ; яҡшыраҡ / насарыраҡ.



**Т** **3.** Предметтарҙы сағыштырыу өсөн башҡорт телендә һүҙгә ниндәй ялғауҙар ҡушыла? Ҡағыҙә сығарығыҙ.

**П** **4.** «Беҙ аҙаштыҡ» темаһына диалогты тәүҙә башҡортса уҡығыҙ, шунан уң бағаналағы тәржемә менән сағыштырығыҙ. Дөрөҫ аңлағанһығыҙмы?

— Һаумыһығыҙ! Әйтегеҙ әле, Нестеров музейына беҙ дөрөҫ барабыҙмы?

— Юҡ, дөрөҫ түгел.

— Ә нисек барырға?

— Тыңлағыҙ: унда йәйәү барырға алыҫ. Автобусҡа ултырығыҙ.

— Унда ниндәй автобус бара?

— Утыҙ беренсе.

— Рәхмәт.

— Здравствуйте! Скажите, пожалуйста, мы правильно идём к музею Нестерова?

— Нет, неправильно.

— А как дойти?

— Послушайте: идти пешком туда далеко. Садитесь на автобус.

— А какой автобус туда идёт?

— Тридцать первый.

— Спасибо.

## 56 Нимә менән? Нисек?
## На чём? Как?

А **1.** Тексты тыңла, һорауҙарға яуап бир.

### Хәйлә

Бер көн иртә менән кросҡа әҙерләндек. Унда класс менән класс ярышырға тейеш. Теҙелдек тә старттан ысҡынып киттек. Сабир минең менән йәнәш бара. Шундай етеҙ елдерә. Мин дә унан ҡалышмаҫҡа тырышам. Минән алда барыусылар күп. Бына тағы берәүһе уҙып китте.

Минең хәлем бөтә башланы. Ә бараһы ер күп әле. Мәктәп стадионын үтергә, унан гараждар янынан паркка барып етергә кәрәк. Ундағы һәйкәлде урап, килгән юлдан кире йүгерергә кәрәк.

Башыма бер уй килде: паркка барып йөрөргә түгел, гараждар араһына инеп йәшенәм дә, малайҙар кире килгәндә, уларға ҡушылам да китәм.

Шулай эшләнем дә ҡуйҙым.

(Ғәли Ибраһимовтан)

1. Сабир нисек йүгерә?
2. Кросс маршруты ниндәй?
3. Әҫәрҙәге малайҙы герой тип әйтеп буламы?
4. Уның хатаһы нимәлә?

! Хәрәкәттә — бәрәкәт. Движение — жизнь.

П **2.** Диалогты уҡығыҙ, уға оҡшатып һөйләшеү ойоштороғоҙ.

| | |
|---|---|
| — Бөгөн ҡайҙа барабыҙ? | — Куда мы сегодня идём? |

— Беҙ стадионға барабыҙ. Унда спорт байрамы була. Беҙ ҙә ҡатнаша алабыҙ.

— Мин бик шат. Физкультура — минең яратҡан дәресем.

— Спорттың ниндәй төрө һиңә оҡшай?

— Оҙонлоҡҡа, бейеклеккә һикереүҙә мин гел беренселекте алам. Мине атайым күнектерә. Бәлки, берәй ярышта миҙал да алырмын әле.

— Ҡарарбыҙ, әйҙә, киттек.

— Мы идём на стадион. Там будет спортивный праздник. Мы тоже можем принять участие.

— Я очень рад(-а). Физкультура — мой любимый предмет.

— Какой вид спорта тебе нравится?

— В прыжках в длину и в высоту я всегда первый(ая). Меня тренирует отец. Может, на каком-нибудь из соревнований и медаль получу.

— Посмотрим, айда пошли.

Т **3.** Ҡайҙа сәйәхәт итергә теләйһегеҙ? Сәйәхәт маршрутын төҙөгөҙ.

**кире** — обратно
**үтергә** — обойти
**йәшенәм** — спрячусь
**ҡушылам** — присоединюсь
**әҙерләндек** — приготовились
**теҙелдек** — построились

**ысҡынып киттек** — побежали
**йәнәш бара** — идёт рядом
**етеҙ елдерә** — бежит быстро
**ҡалышмаҫҡа тырышам** — стараюсь не отставать
**уҙып китте** — обогнал
**хәлем бөтә** — сил не остаётся
**уй килде** — пришла мысль

## 57-58 Нимә менән? Нисек?
## На чём? Как?

**А** **1.** Тексты уҡығыҙ, һорауҙарға яуап бирегеҙ.

### Юл

Юлһыҙ тормош юҡ. Хәҙер транспорт төрҙәре күп. Берәүҙәр машинала, икенселәр автобуста елдерә. Ҡайһы бер кешеләр троллейбус һәм трамвайҙа бара. Кемдер һыу юлын үҙ күрә: теплоходтар, яхталар, кәмәләр сәйәхәтсене кәрәкле урынға илтә. Поезда сәйәхәт итеү уңайлы: тәҙрәнән ҡарап, донъя күреп бараһың. Йоҡлап та алырға була. Иң тиҙ транспорт — самолёт. Бер көн эсендә донъяның иң алыҫ сигенә барып етергә мөмкин.

Юлда йөрөүҙең үҙ ҡағиҙәләре бар. Уларҙы машина йөрөтөүселәр генә түгел, йәйәүлеләр ҙә яҡшы белергә тейеш. Ҡағиҙәне боҙған кешенең бәләгә осрауы мөмкин.

(«Мәктәп календары»нан)

1. Юл йөрөү ҡағиҙәләре ни өсөн кәрәк?
2. Троллейбус һәм трамвай ни яғы менән оҡшаш?

**П** **2.** Көләмәсте уҡығыҙ, әңгәмә ҡороғоҙ.

Автобуста кешеләр күп. Бер бабай баҫып тора, эргәһендә бер малай ултыра. Бер кеше:

— Ниңә ололарға урын бирмәйһең? — тип һораған малайҙан.

Малай, ғәжәпләнеп:

— Ул үҙемдең олатайым бит, — тип яуаплаған.

!

**Юл ҡағиҙәләрен хәтереңдә тот!**

Юл йөрөү ҡағиҙәләрен боҙма.

Урам аша сыҡҡанда телефондан һөйләшмә.

Туҡтап торған автобустың артынан, трамвайҙың алдынан сыҡ.

Юлда барғанда ҡысҡырып һөйләшмә.

Транспортта оло кешеләргә урын бир.

Т **3.** Юл билдәләрен беләһеңме? Төркөмдә бер-берегеҙҙе тикшереп ҡарағыҙ.

Киҫәтеүсе билдәләр:



Тыйыусы билдәләр:



Күрһәтеүсе билдәләр:



Сервис билдәләре:



| ## Тел күрке — мәҡәл | ## Мысли краса — пословица |
| --- | --- |
| Алма ағасынан алыҫ төшмәй. | Яблоко от яблони недалеко падает. |
| Бер тиренән тун булмаҫ. | Из одной овчины шубу не сошьёшь. |
| Күп йөрөгән күп күрә. | Кто много путешествует, тот много видит. |
| Күп уҡыһаң, күп белерһең. | Кто много читает, тот много знает. |
| Бүрәнә үтә бүре күргән. | Увидел пень через плетень. |
| Белем — ҡош, аҡыл — ҡанат. | Знание — птица, ум — крылья. |
| Ете ҡат үлсә, бер ҡат киҫ. | Семь раз отмерь, один раз отрежь. |
| Йөҙ һум аҡсаң булғансы, йөҙ дуҫың булһын. | Не имей сто рублей, а имей сто друзей. |
| Кейемгә ҡарап ҡаршы алалар, аҡылға ҡарап оҙаталар. | По одёжке встречают, по уму провожают. |
| Һүҙ дауалай, һүҙ яралай. | Слово лечит, слово и калечит. |
| Кешегә соҡор ҡаҙма, үҙең төшөрһөң. | Не рой другому яму, сам в неё попадёшь. |
| Ни сәсһәң, шуны урырһың. | Что посеешь, то и пожнёшь. |
| Себеште көҙ һанайҙар. | Цыплят по осени считают. |
| Теле юҡтың иле юҡ, иле юҡтың көнө юҡ. | Без языка нет отчизны, без отчизны нет жизни. |
| Тимерҙе ҡыҙыуында һуҡ. | Куй железо, пока горячо. |
| Ут менән уйнама, үҙең көйөрһөң. | Не играй с огнём — обожжёшься. |

Хеҙмәтенә күрә хөрмәте.
Юрғаныңа ҡарап аяҡ һуҙ.
Йәйҙең бер көнө йылды туйҙыра.
Эшләһәң — тир сыға, тир менән сир сыға.
Һуң булһа ла, уң булһын.

Һаран ике түләй.
Үҙеңде ҙурлама, кешене хурлама.
Сананы — йәй, арбаны ҡыш әҙерлә.
Бүренән ҡурҡҡан урманға бармаҫ.
Кешенең кем икәнен белгең килһә, төҫөнә ҡарама, дуҫына ҡара.
Ҡурҡҡанға ҡуш күренә.
Байрам ашы — ҡара-ҡаршы.
Ҙурлыҡ буй менән түгел, уй менән.
Баш һау булһа, бүрек табылыр.
Ашыҡҡан ашҡа бешкән.

Уңһаң да үҙең, туңһаң да үҙең.
Әкрен барған тиҙ етер.

Яңғыҙлыҡ әжәлдән яман.

По труду и честь.
По одёжке протягивай ножки.
Летний день год кормит.

Человек от лени болеет, от труда здоровеет.
Лучше поздно, чем никогда.
Скупой платит дважды.
И сам не зазнавайся, и других не унижай.
Готовь сани летом, а телегу — зимой.
Волка бояться — в лес не ходить.
Скажи мне, кто твой друг, и я скажу, кто ты.

У страха глаза велики.
Долг платежом красен.

Велик телом, да мал умом.
Была бы голова, шапка найдётся.
Поспешишь — людей насмешишь.
На Бога надейся, а сам не плошай.
Тише едешь, дальше будешь.
Одиночество хуже смерти.

# Йөкмәткеһе / Содержание


| | |
|---|---|
| **1.** Һаумы, мәктәп! . . . . . . . . . . . 3 | Здравствуй, школа! . . . . . . . . . . 3 |
| 1) Үтелгәндәрҙе ҡабатлау . . 3 | Повторение изученного . . . . 3 |
| **2.** Мин танышам . . . . . . . . . . . . 5 | Я знакомлюсь. . . . . . . . . . . . . . . 5 |
| 2) Һин кем? . . . . . . . . . . . . . . 5 | Ты кто? . . . . . . . . . . . . . . . . . . 5 |
| 3) Һин ҡайҙа йәшәйһең? . . . 8 | Где ты живёшь?. . . . . . . . . . . 8 |
| 4–7) Һин ҡайҙан?. . . . . . . . . .10 | Ты откуда? . . . . . . . . . . . . . . .10 |
| **3.** Мин белем алам . . . . . . . . .18 | Я получаю знания . . . . . . . . . . .18 |
| 8–9) Был нимә? Бармы? . . .18 | Что это? Есть ли?. . . . . . . . . .18 |
| 10–12) Нимәһеҙ? . . . . . . . . . 22 | Без чего?. . . . . . . . . . . . . . . . 22 |
| **4.** Мин һәм минең ғаиләм . . 27 | Я и моя семья . . . . . . . . . . . . . 27 |
| 13) Кем? Нимә эшләй? . . . . 27 | Кто? Что делает?. . . . . . . . . 27 |
| 14–17) Нимә эшләргә тейеш? . . . . . . . . . . . . . . . . . . 29 | Что должен делать? . . . . . . 29 |
| **5.** Мин һөнәр һайлайым . . . . . 37 | Я выбираю профессию . . . . . 37 |
| 18–20) Кем ҡайҙа эшләй? . . .37 | Кто где работает?. . . . . . . . 37 |
| **6.** Мин тәбиғәтте яратам . . . . 45 | Я люблю природу. . . . . . . . . . 45 |
| 21–30) Нимәләр? Нимә эшләйҙәр?. . . . . . . . . . . . . . . 45 | Что? Что делают? . . . . . . . . 45 |
| **7.** Минең яратҡан миҙгелем. . 66 | Моё любимое время года . . 66 |
| 31–40) Нимә? Нимә эшләй?. 66 | Что? Что делает?. . . . . . . . . 66 |
| 41–42) Минең яратҡан миҙгелем . . . . . . . . . . . . . . . . 86 | Моё любимое время года. . . . . . . . . . . . . . 86 |
| **8.** Минең гардеробым . . . . . . 90 | Мой гардероб . . . . . . . . . . . . . 90 |
| 43–48) Ниндәй? . . . . . . . . . . . 90 | Какой? . . . . . . . . . . . . . . . . . . 90 |
| **9.** Минең тыуған көнөм . . . . .104 | Мой день рождения . . . . . . . .104 |
| 49–51) Ҡасан?. . . . . . . . . . . . .104 | Когда? . . . . . . . . . . . . . . . . . .104 |
| **10.** Мин сәйәхәтсе . . . . . . . . . . 110 | Я путешественник . . . . . . . . . . 110 |
| 52–58) Нимә менән? Нисек? . . . . . . . . . . . . . . . . . 110 | На чём? Как? . . . . . . . . . . . . . 110 |
| Тел күрке — мәҡәл . . . . . . . .120 | Мысли краса — пословица . .120 |

Учебное издание

**Давлетшина** Мархаба Саяфаровна
**Кинзябаева** Нафиса Наилевна
**Садыкова** Гульназ Мухаметовна

**БАШКИРСКИЙ ЯЗЫК**

**Учебное пособие для 3 класса для изучения башкирского языка (как государственного) в общеобразовательных организациях с русским языком обучения**

(на башкирском и русском языках)

Уҡыу баҫмаһы

**Дәүләтшина** Мәрхәбә Сәйәфәр ҡыҙы
**Кинйәбаева** Нәфисә Наил ҡыҙы
**Садыҡова** Гөлназ Мөхәмәт ҡыҙы

**БАШҠОРТ ТЕЛЕ**

**Уҡытыу рус телендә алып барылған дөйөм белем биреү ойошмаларының 3-сө класы өсөн башҡорт телен (дәүләт теле булараҡ) өйрәнеү өсөн уҡыу ҡулланмаһы**

Редакция мөдире Г. А. Раянова
Мөхәррире Ә. А. Баһаманова
Рәссамы А. Ә. Василов
Биҙәлеш мөхәррире А. Р. Мөхтәруллин
Техник мөхәррире Г. Р. Исхаҡова
Корректорҙары Г. Ә. Таһирова, Г. Ф. Закирова

Баҫырға ҡул ҡуйылды 06.10.2017. Форматы 70×90 1/16. Офсет ҡағыҙы. JournalSans гарнитураһы.
Офсет ысулы менән баҫылды. Шартлы баҫма таб. 9,06+0,29 форз. Шартлы буяу отт. 38,02.
Иҫәп-нәшер таб. 5,34+0,48 форз. Тиражы 38440 дана. Заказ 1.0198.17.

Башҡортостан Республикаһының Зәйнәб Биишева исемендәге
Башҡортостан «Китап» нәшриәте дәүләт унитар предприятиеһы.
450001, Өфө, Октябрь проспекты, 2.


ыласын
ҡарлуғас
өкө
торна
ҡыр ҡаҙы
аҡсарлаҡ
һайыҫҡан
бөркөт


бал ҡорто
энәғараҡ
ҡуңыҙ
күбәләк
үрмәксе
ҡыҫала
йылан
ҡусҡар
баҡа
кеҫәртке
ташбаҡа